ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

2-8 апрель (алағарай)

2016

№ 14 (692)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ни өсөн "Өфө" тип атала?

Атаманың килеп сығышына тағы бер аңлатма

7

Иңебеҙгә һалынған бурыстарыбыҙ күп,

әммә милләт әсәһе булыу - иң мөһиме

8-9

Кешеләр оҙаҡ йәшәһен, тип…



үҙем дә оҙаҡ йәшәй башланым

11

Ололар һүҙе - аҡылдың үҙе

13

ТВ-программа 14

Кешеләр ситтән дошман эҙләргә һәм уны үҙ бәләләрендә ғәйепләргә ярата. Кешенең алты ғына дошманы бар: ул асыу, көнләшеү, эгоистлыҡ, тәкәбберлек, нәфсе, иллюзия. Әгәр ҙә һин үҙеңдәге ошо дошмандарыңды еңһәң, бер ниндәй тышҡы дошмандар ҙа ҡурҡыныс түгел. Был еңеүеңдән һуң һин әйләнә-тирәңдә бары тик дуҫтар ғына тороп ҡалыуын күрерһең.

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

Һуңғы йылдарҙа ут менән һаҡһыҙ эш итеү йә эскелек сәбәпле янғындар йыш сыға. Әле килеп ауыл-калаларҙы һыу баҫыу көтөлә. Бәлә-казаларҙы иҫкәртеү йәһәтенән ниндәй һаҡланыу саралары күрелә?

Шәүкәт САЛАУАТОВ, Белорет районы Йөйәк ауыл хакимиәте башлығы: Быйыл боҙ әллә ни ҡалын булмаһа ла, хәүеф бар, сөнки ҡар күп, көҙҙән ямғыр күп яуыуы сәбәпле, ер ҙә артыҡ дымлы. 2013 йылда Ғәбдүкте һыу баҫҡан ваҡытта боҙ ҡалынлығы 60-70 см самаһы булһа, быйыл 40 см тирәһе генә. Шулай ҙа көтөлмәгән хәлдәргә әҙер торорға тырышабыҙ. Иң башта хәүефле зонаға ингән хужалыҡтарҙың исемлеген төҙөнөк. Йөйәктә - 47, Ғәбдүктә 78 хужалыҡ һыу аҫтында ҡалыуы бар. Боҙ ҡапыл төндә китеп барһа тип, урамдарға өҫтәмә яҡтыртҡыстар ҡуйҙыҡ. Әле был эште Ғәбдүктә дауам итәбеҙ. Ике ауылдағы тауыш сиренаһының төҙөкләнгән тикшереү өсөн күнекмәләр үткәрҙек. Һыу ныҡ ташҡан ваҡытҡа депутаттар, ауыл хакимиәте хеҙмәткәрҙәре, старосталар менән дежурствола ойоштороу ҡаралған. Быйыл боҙҙоң китеүен контролдә тотоу өсөн Архангел районының Берҙәм дежурдиспетчер хеҙмәте менән бәйләнеш булдырҙыҡ. Боҙ ҡуҙғалыу менән уларҙы иҫкәртһәк, улар боҙҙоң нисек үтеүен хәбәр итәләр. Һыу тығылмаһын өсөн тимер юлсылар Ғәбдүк ауылы уртаһынан Инйәр йылғаһы аша үткән тимер юл күперенең нығытмаһы тирәләй боҙҙо тишкеләп тора.

Әле урманда 70-80 см тәрәнлегендә ҡар бар. Ул апрель аҙағына тиклем ирейәсәк, шуға тиклем хәүеф тә кәмемәйәсәк. Шуға күрә халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Һыу баҫҡанға тиклем һәм һыу баҫҡан осраҡта үҙеңде нисек тоторға, ниндәй хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәклеген аңлатып, иҫкәртмәләр таратабыҙ. Йыл һайын да Ғәбдүк - Йөйәк юлының 1,5 саҡрымдай ерен һыу баҫа , шул арҡала халыҡ юлһыҙ ҡала. Быны күҙ уңында тотоп, бөтәһе лә аҙыҡ-түлек, дарыу һәм башҡа кәрәк-яраҡтарын алдан уҡ әҙерләп, бәлә килгән осраҡта малын, мөлкәтен һаҡлау өсөн хәүефле зонаға эләкмәгән туғандары, таныштары менән килешеп ҡуйған.

(Дауамы 2-се биттә).

ЗАМАН БАШҠОРТО

ТӘБИҒӘТЕ МЕНӘН - КӨРӘШСЕ,

булмышы менән - еңеүсе

Бөгөн спортта ҙур уңышҡа өлгәшкән тағы бер донъя чемпионы менән таныштырабыҙ. Ул үҙе Стәрлетамаҡта тыуған, 18 йәшендә Өфөгә күскән. Әле өсөнсө йыл Екатеринбург ҡалаһында тренер - үҙенең спорт клубын етәкләй. Атаһы - Миәкә, ә әсәһе Белорет районынан. Геройыбыҙ бала сағында бөтөн тиҫтерҙәре ише космонавт, кәмендә осоусы булырға хыялланған. Мәктәптә белем дә эстәгән, спорт менән дә ҡыҙыҡһынған, малайҙар араһында була торған йоҙроҡло алыштарҙа ла ҡатнашып өлгөргән. Әле уның һәр көнө күнекмәләр залында үтә. "Минең өсөн спорт - ул һөнәр генә түгел, йәшәү рәүеше лә", - ти ҡунағыбыҙ - һуғыш самбоһы буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы, ҡатнаш алыш төрҙәре сәнғәте буйынса (ММА) халыҡ-ара турнирҙар еңеүсеһе Венер ҒӘЛИЕВ. Ул тиҙҙән Өфө-Аренала Әрмәнстан спортсыһы Давид Хачатрян менән "FIGHT NIGHT GLOBAL 45" ҡатнаш алыш төрҙәре буйынса халыҡ-ара турнирҙа чемпионлыҡ билбауы өсөн көрәшәсәк. Әйткәндәй, был ярышта Венер Ғәлиевтың уҡыусыһы, йәш спортсы, Шишмә районы егете Руслан Яманбаев та Әхмәт Балкизов менән алышасаҡ.

(Дауамы 6-сы битте).

12+

✓ *Яҙғы ташҡын - беҙҙең өсөн көтөлмәгәнлек түгел, ә ғәҙәти эш. Хәҙер бер кем дә кабинетта ташҡын башланыуын көтөп ултырмай, райондарҙа ла эш ҡайнай, һәр кемгә аныҡ бурыстар еткерелгән.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Һуңғы йылдарҙа ут менән һаҡһыҙ эш итеү йә эскелек сәбәпле янғындар йыш сыға. Әле килеп ауыл-ҡалаларҙы һыу баҫыу көтөлә. Бәлә-ҡазаларҙы иҫкәртеү йәһәтенән ниндәй һаҡланыу саралары күрелә?

(Башы 1-се биттә).

Рөстәм ҒӨБӘЙҘУЛЛИН, журналист: Баш ҡалабыҙҙың Киров район биләмәһендә йылдың-йылы һыу баҫыу зонаһында ҡалыусы урамдар һәм биҫтәләр байтаҡ иҫәпләнә, шуға ла ташҡынға әҙерлек эштәре ҡыш мәленән үк башланып китте. Әлеге мәлдә шәхси секторҙағы йорттар буйлап йөрөп сығыу тамамланып килә. Райондың Йәмәғәт хәүефһеҙлеге идаралығы хеҙмәткәрҙәре МЧС ҡотҡарыусылары һәм урам комитеттары рәйестәре менән берлектә һәр йорт ихатаһында булырға тырыша. Уларҙың маршрутына Кооператив ялан, 3-сө пристань, Дудкино, "Башҡортостан сәскәләре" ҡасабалары, Тирмән комбинаты, Кузнецов затоны, 5, 6-сы "Кордон" биҫтәләре инә. Ташҡын аҫтында ҡалыу ихтималы янаған был урамдарҙа йәшәүселәрҙең һәр береһен күреп һөйләшеү, аңлатыу эштәре алып барыла, листовкалар таратыла, кемгә ниндәй ярҙам кәрәклеге асыҡлана. Район хакимиәте башлығы етәкселегендә ташҡынға ҡаршы комиссия һәр аҙна тиерлек йыйылып, кәңәшмәләр үткәрә. Унда ташҡын осорон аварияларһыҙ һәм фажиғәһеҙ үткәреп ебәреү буйынса төҙөлгән саралар планына ярашлы, предприятиелар һәм учреждениелар етәкселәре, баҡса кооперативтары рәйестәре һәм граждандар иҫәбенән әүҙем йәмәғәтселәр саҡырыла. Районда ташҡынға ҡаршы 8 штаб төҙөлгән, улар янындағы ҡотҡарыу саралары менән йыһазландырылған ҡотҡарыу постары эшенә 74 кеше беркетелгән. Предприятиелар һәм профилакторийҙар нигеҙендә 35 ваҡытлыса йәшәү урыны булдырылып, унда барлығы эвакуацияланасаҡ 3 700 кеше урынлаша ала. Бында йәшәү өсөн бөтөн шарттар бар. Әлеге ваҡытта йылға, күл ярҙарын нығытыу маҡсатында грунт ташыла, сөнки кәмендә 600 тонналап балсыҡ, тупраҡ сифатында запас тупланырға тейеш.

Марат ЛАТИПОВ, РФ Граждандар оборонаһы эштәре, ғәҙәттән тыш хәлдәр эҙемтәләрен бөтөрөү министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығы начальнигы: Быйыл республикала ташҡын "катастрофик кимәлдә" көтөлмәһә лә, йылдағынан юғары булыр, тип күҙаллана. Һыу баҫыу - ул бик күп факторҙарға бәйле. Мәҫәлән, ҡар һыуҙарының муллығына, көндәрҙең йылы тороуына, ямғырҙар яуыуына, йылғаларҙың үҙ ваҡытында асылыуына һ.б. Беҙ бер нисә йүнәлештә тикшеренеү эштәре алып барабыҙ. Ҡарҙағы һыу күләмен үлсәү буйынса, мәҫәлән. Башҡортостан территорияһында 8 урында ҙур ғына боҙ тығыны бар. Ҡотҡарыусылар был өлкәлә урындарҙағы муниципалитеттар менән берлектә планға ярашлы эш алып бара: боҙҙарҙы бысып, ҡатламдарҙы йоҡарталар. Шулай уҡ шартлатыусы командалар ҙа тупланып, уларға эш башларға рөхсәт бирелгән. Һыу баҫыу эҙемтәләре менән көрәшкә булышлыҡ итәсәк техника әҙерләнә. Ҡыҫҡаһы, яҙғы ташҡын - беҙҙең өсөн көтөлмәгәнлек түгел, ә ғәҙәти эш. Хәҙер бер кем дә кабинетта ташҡын башланыуын көтөп ултырмай, райондарҙа ла эш ҡайнай, һәр кемгә аныҡ бурыстар еткерелгән: күперҙәр торошо, быуалар һәм йылғаларҙың ташыу урындары тикшерелә.

Иртә яҙ булыуға ҡарамаҫтан, ҡотҡарыусылар әле үк йәйге янғындар хәүефе осорона ла әҙерләнә. Башҡортостанда йылдың-йылы урман янғындары сығанаҡтары килеп сығып ҡына тора. Ләкин, бәхеткә күрә, беҙҙең хеҙмәткәрҙәр һәм Урман хужалығы министрлығы, урындарҙағы муниципалитеттар ҡатнашлығындағы берлектәге иҫкәртеү эштәре һөҙөмтәһеҙ ҡалмай. Тик бына өлкәндәрҙе генә түгел, йыш ҡына балаларҙы ҡорбан итеүсе көнкүреш янғындары хаҡында быны әйтеп булмай... Бөтөн булған янғындарҙың 76 процентҡа яҡын иң күп өлөшө торлаҡ секторына тап килә, 42 проценты йорт-ҡура ҡаралтыларында булһа, 13 проценты транспорт саралары-на, унан ары баҡсасылыҡ-дача ҡаралтыларына ҡағыла. Йорттарҙа һәм фатирҙарҙа булып торған янғындар нигеҙҙә төҙөк булмаған электр үткәргестәрҙә ут ҡабыныу сәбәпле башланып китә. Шуға ла йорт хужалары үҙ өйөндәге электр үткәргестәрҙең дә, мейес һәм төтөн юлдарының да, газ һәм электр приборҙарының да торошо өсөн шәхси яуаплылыҡ тойорға бурыслы. Һәм ут менән шаярырға яратыусы балалар өсөн дә, әлбиттә.

"Янғындың хәүефле факторы" тигән төшөнсә бар. Күҙ алдын томалап, һауалағы кислород күләмен кәметеүсе төтөн ул фактор. Бындай осраҡта бәләгә тарыусы углекислый газ һулап өлгөрә һәм үҙен дә, башҡалар ғүмерен дә ҡотҡара алмай һәләк була. Ошо араларҙа ғына Стәрлетамаҡ ҡалаһында булған фажиғәне алайыҡ: тап ана шундай янғын һөрөмөнән ағыуланып 12 кеше үлде. Шуныһы үкенесле: ниндәй генә янғын сыҡмаһын, ул һәр ваҡыт кеше факторына бәйле, шуға ла үҙ йорттарығыҙҙа, эш урындарында төҙөклөк һәм тәртип булдырыу - һәр кемдең бурысы, тип ҡат-ҡат ҡабатларға тура килә.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

ИҒТИБАР!

МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Апрелдән 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу хаҡтары бер аҙ ҡиммәтләнһә лә, уҡыусыларыбыҙ беҙҙең дуҫлыҡҡа тоғро ҡалыр, тип ышанабыҙ. Шулай итеп, бынан һуң 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ә гәзиттең 50673 индексы ойошмалар һәм предприятиелар өсөн тәғәйенләнгән һәм хаҡы - 604 һум 32 тин. 50665 индексы менән шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары 511 һум 02 тингә яҙыла ала.

Мартта "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән өс уҡыусыбыҙға **"Көрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"** китабы вәғәҙә иткәйнек. Бына ул бәхетле уҡыусыларыбыҙ: Баймаҡ районы Ярат ауылынан Әхәт Ҡарамурзин, Ейәнсура районы Үтәғол ауылынан Н. Нияҙғолова, Бөрйән районы Килдеғол ауылынан Ғәлимә Шәрәфуллина.

• Дәртләндереү саралары дауам итә. Гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын апрелдә ебәргәндәрҙән кемдәрҙер бүләккә **"Көрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма", "400 башҡорт халыҡ йыры", "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** (русса) һәм башҡа китаптар алып ҡыуанырбыҙ бик ихтимал.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойоштороlған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 438 һумға яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарының һорауҙарына яуап бирep, төбәктәге юлдар торошон кире баһаланы һәм юлсылар эшенә талаптарҙың көсәйтеләсәген белдерҙе, юл япмаһының хәҙерге торошон быйылғы ҡыштың температура үҙенсәлектәре менән аңлатты. Ул проблеманың тиҙ, яңы технологиялар ҡулланып хәл ителәсәген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓ Башҡортостан илдең төҙөлөш тармағында хаҡтар ҡуйыу һәм мониторинг үҙәктәрен булдырыу өсөн пилот төбәге булараҡ сығыш яһаясаҡ. Был хаҡта Рәсәйҙең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Хәмит Мәүлийәров хәбәр итте. "Хәҙер беҙ төҙөлөштә хаҡтар билдәләүҙең яңы моделенә күсәбеҙ һәм уны һынау өсөн Башҡортостанды һайланыҡ. Бында юғары квалификациялы белгестәр бар. Бынан тыш, Башҡортостан - төҙөлөш тармағында алдынғы төбәктәрҙең береһе, күп күрһәткестәр буйынса алда бара", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Хәмит Мәүлийәров.

✓ Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 71 йыллығын байрам итеүгә арналған төп саралар билдәле булды. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов "2016 йылда Еңеү көнөн байрам итеү тураһында"ғы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Ошо документҡа ярашлы, 6 майҙа Өфөлә байрам концерты һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын тантаналы ҡабул итеү ойошторола. Ветерандар "Башҡортостан" дәүләт концерт залына йыйыла.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәйҙәге ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияның яуаплы секретары Григорий Орджоникидзе менән осрашты. Унда республика биләмәһендә берлектәге проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу, шул иҫәптән Рәсәйҙә тәүге геопарк булдырыу, "Евразия йөрәге" фестивале сиктәрендә "Евразия киңлегендә мәҙәни-ара диалог" тип аталған ғилми конференция үткәреү мәсьәләләре тикшерелде.

✓ 7 апрелдә киске сәғәт 7-лә Башҡортостан юлдаш телеканалында Рөстәм Хәмитов менән тура бәйләнеш ойошторола. Хәҙерҙән үк Башҡортостан юлдаш телеканалы сайтына инеп, "Республика Башлығына һорау бир" ҡушымтаһында үҙеңде ҡыҙыҡһындырған һорауҙы яҙып ҡалдырырға мөмкин. Мобиль һәм стационар телефондарҙан шылтыратыу бушлай.

✓ *Көндәлек ваҡ мәшәкәттәргә күмелеп, ваҡыт үткәнен һиҙмәй ҙә йәшәйбеҙ. Ә бит башҡорт халҡының боронғо мәҙәктәре, көләмәстәре, көлөп, онотоп ҡына ҡуя торған әйбер түгел. Уларға бик тәрән мәғәнә, аҡыл һалынған.*

БЫЛ АЙҘА...

ЯҘ ЯҘЛЫҒЫН ИТЕР -

ҡар тауҙарын иретер

Апрель, йәғни алағарайҙа, аҡ һыйыр тороп китер, ҡара һыйыр ятып ҡалыр. Аҡман-тоҡман быйыл холҡон күрһәтеп алған ҡайһы бер райондарҙа, бигерәк тә Хәйбулла, Баймаҡ яҡтарында, аҡ һыйыр бер аҙ тотҡарланыр, моғайын. Сөнки Ҡыш бабайҙың китергә теләмәй тартҡылашыуы һөҙөмтәһе тиҙ генә оноторлоҡ булманы: ҡар буралары өйҙө, юлдарҙы, хатта тотош ауылдарҙы күмеп китте, күпме кеше зыян күрҙе.

Бер яҡтан, бөгөнгөбөҙгә ныҡ ҡына һынау ҙа булды был: ауылдарҙың стихияға ҡаршы тороруоҡ, уның эҙемтәләре менән көрәшерлек бер ниндәй техникаһыҙ тороп ҡалғанлығын күрһәтте ул. Төпкөлдәрҙәге тораҡ пунктарында ғына түгел, хатта район үҙәктәре урамдары ла йөрөрлөк булманы буран һуңынан. Элек, ярай ҙа, колхоз-совхоздарҙа, МТС-тарҙа, башҡа эре предприятиеларҙа ҡеүәтле техника берәмектәре ҡар баҫкан юлдарҙы төнө буйы ялт иттереп таҙартып ҡуя ине... Әле Урал аръяғына хатта хәрби подразделениенан килеп еткән ярҙамсы техникалар ҙа боҙолоп ултырған, имеш, тиҙәр. Сөнки ямғыр ҡатыш яуған ҡар, туңдырып ебәргәс, тотошлайы менән боҙло ҡоршауға әйләнеп ҡатҡан. Ошоларҙы уйлаһаң, тормошоҙоҙоң әллә ни саҡлым нескә урындары, һаҡлауһыҙ-яҡлауһыҙлыҡтары күҙгә асыҡ салына. Тәбиғәт бер туҡтауһыҙ һабаҡтар биреп торһа ла, кеше тигәнең барыбер ҙә тормош хәүефһеҙлектәре дәрестәрен тейешенсә үҙләштерә алмай, стихия менән күҙмә-күҙ осрашҡанда - ярҙамһыҙ, ярым-яңғыҙ... Апрелдә тағы бер һынау көтә беҙҙе - ташҡынға әҙер булырға кәрәк. Әлегесә, уйламағанда, көтмәгәндә килеп баҫмаһын, тиһәк, ҡаза ауылдарыбыҙҙы бөлдөрмәһен - һиҙгер һәм дә өлгөр булайыҡ, йәмәғәт!

Ә тормош бер нигә ҡарамай алға елә, яҙ яҙлығын итә - ауыҙ йырып, 1 апрель килде бына. Бирһен Хоҙай, Көлкө көнө, Ҡоштар көнө менән башланған ай йылмайыуҙарға, күңелле, күркәм ваҡиғаларға, йырмоңдарға бай булһын, тип теләйек, сөнки алағарай ҙа матур ғына иҫтәлекле көндәрҙән тора.

2 апрелдә генә лә, мәҫәлән, бер юлы өс ваҡиға билдәләнә: Геологтар көнө, Халыҡтар берҙәмлеге көнө һәм Халыҡ-ара балалар китабы көнө. Шул уҡ мәлдә сәләмәтлекте ҡайғыртып алыуға ла форсат тыуа - **7 апрель** - Бөтөн донъя һаулыҡ көнө. Кешелек хәтерендә ихлас йылмайыуы менән мәңгелеккә ҡалған Юрий Гагариндың тарихта беренсе булып асмандарға ашыуына ла 55 йыл үтеп киткән. Шул көндән алып **12 апрель** - Бөтөн донъя авиация һәм космонавтика көнө булараҡ билдәләнә. Мәҙәниәт көнөнөң (**15**) һәйкәлдәр һәм тарихи урындарҙы (**18**) һаҡлау бурысы менән тыранан-тура бәйләнеше барлығы бәхәсһеҙ ҙә аңлашыла, ләкин тап ана шул объекттарҙың әленән-әле вандализмға дусар ителеүе - заманыбыҙ ғибрәттәренең иң яманы.

Ошо көндәрҙән һуң килгән Яҙғы мәрхәмәтлек аҙнаһы (**18-24**) әлеге яуызлыҡ күренештәренә ҡаршы көрәшә алмаған хәлдә лә, Умырзаялар көнөнә (**19**) был аҙналыҡтың туранан-тура мөнәсәбәте бар."Ҡыҙыл китап"та ғына ҡалып килгән был яҙ сәскәләрен һәм, ғөмүмән, тәбиғәткә ҡарата миһырбанлылыҡ тәрбиәләү аҙналыҡ эш кенә булмаһа ла, шул ваҡыт эсендә лә әллә күпме файҙалы ғәмәлдәр башҡарырға була. Ә бына **21**-е көнө байрамдары билдәләнәсәк Урындағы үҙидаралыҡ органдарының вәкәләттәре һәм, тимәк, мөмкинлектәре ифрат ҙур булһа ла, ниндәйҙер өлкәлә, бигерәк тә урындарҙа халыҡ тормошон көйләү, еңеләйтеү, сәләмәтләндереү йәһәтенән әллә ни әүҙемлектәре һиҙелмәй. Ер-Әсәбеҙ ҙә (был көн **22**-һе) кеше хәстәрлегенә, яҡынайтып әйткәндә, әлеге шул урындарҙағы үҙ идаралыҡ органдары хәстәрлегенә бик тә мохтаж икәнлекте лә беләбеҙ.

Бөгөнгө халыҡ-ара хәлдәр көсөргәнешен йомшартып ебәреүсе бер көс кәрәк. Ә кем булыр ине һуң бындай көс? Минеңсә, бындай миссия йәштәр ҡулынан килер ине, моғайын! **24 апрель** - Йәштәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө тигән дата шундай уйға һала. Донъя йәштәре бөгөн ни менән мәшғүл икән? Улар, моғайын да, бөтөн прогрессив һәм позитив көстәрҙе берләштереп, ҡапма-ҡаршылыҡлы "төйөндәр"ҙе сисеүгә булышлыҡ итеп, ихтимал, тыныслыҡ илселәре була алыр ине. Тик йәштәр тауышы ишетелмәй бөгөн, күрәһең, улар башкөллә виртуаль киңлектә йәшәй, донъя хәлдәрендә эштәре юҡ. Әйткәндәй, сәйәсәттә уртаҡ телгә килергә беҙгә Туғанлашҡан ҡалалар көнө (**27**) лә ярҙамға килә алыр ине. Юғиһә, үҙ-ара ярҙам һәм теләктәшлек тигән төшөнсәләр ҡәҙерен кешелек бәлә-ҡазаға тарыҡҡанда ғына иҫкә төшөрөүсән. Ана шундай һәләкәттәрҙең иң яманы булған Чернобыль фажиғәһенә 30 йыл тулған көн (**26**) саманан тыш шашынған Украина нацистарын бер аҙ аңдарына килтерер, айбындырыр, бәлки?.. Был һәләкәттә бөтөрөү эшендә 600 меңләп кеше, шул иҫәптән, Башҡортостандан да, ҡатнашып, уларҙың күбеһе ваҡытынан алда был донъя менән хушлашты, ҡалғандары нурланыу сиренән яфа сигә.

Йәмле яҙ айында башҡорттоң ике зыялыһы - мәғрифәтсе-шағирҙары донъяға килгән. Йәмәғәтселегебеҙ **Гарифулла Кейековтың** (1861-1918) тыуыуына - 155, **Сафуан Яҡшыҡоловтың** (1871-1931) тыуыуына 145 йыл тулыуҙы билдәләйәсәк. 16-һы - телсе-ғалим **Әкрәм Бейешевтың** (1926-2003) тыуыуына - 90 йыл. Ошо уҡ айҙың 10-ында 80 йәше туласаҡ күренекле ғалимдарыбыҙҙың береһе - тупраҡ белгесе, биология фәндәре докторы, профессор, фән өлкәһендә БР Дәүләт премияһы лауреаты **Әсғәт Моҡатановты** тыуған көнө һәм данлы юбилейы менән ҡотлайбыҙ!

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?

ДОНЪЯҒА ЙЫЛМАЙЫП БАҒАЙЫҠ!

Нәғим НУРҒӘЛИН, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы: Хәҙер кешеләр бөтә нәмәгә лә бик етди ҡарай. Былай ҙа ауырлашып барған тормошто тағы ла ҡатмарлаштыра. Саҡ ҡына берәй ҡыйынлыҡ килеп тыуһа, берәй һүҙ ишетһә, күңеленә ауыр алыусылар күп. Эштә, урамда ниндәйҙер хәл-ваҡиғаларға тарып, кәйефе төшөп ҡайтып иннһә, йыш ҡына көсөн ҡатынына, балаларына төшөрөүселәр ҙә осрап тора. Ҡыйынлыҡтар - ул бармаҡҡа ингән шырау. Шырауҙы алып ташлағас, һыҙланыуҙар ҙа бөткән кеүек, ауыр мәлде үткәреп ебәрһәң, еңеллек килә. Бары тик артыҡ көйәләнеп, йөрәгеңде бөтөрөп, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп китмәҫкә һәм тыныс ҡына мәсьәләне хәл итергә кәрәк.

Бөтәһе лә бер Соломон батшаның: "Барыһы ла үтә, быныһы ла үтер", - тигән яҙыулы балдағы тураһында тарихты белә. Унда "сабырлыҡ" тигән ир-егеттәргә бик тә кәрәкле шәп сифаттарҙың береһе сағылыш тапҡан. Халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләргә теләйбеҙ икән, тормош ауырлыҡтарын сабыр ғына еңеп сығырға һәм күп нәмәгә юмор күҙлеге аша ҡарарға өйрәнәйек. Башҡорт халҡы бик йор һүҙле, һәр урында мәҙәк табырға, мәрәкәләргә оҫта. Тормошта көлкөгә лә урын булһа, йәшәүе лә еңелерәк.

Бына шулай, барыһы ла яҡшы булыуын теләһәң, тирә-яғыңда яҡты уйлы кешеләргә, изгелекле эштәргә иғтибар итергә өйрән. Юғиһә, хатта башҡорт баҫмаларында, телевидение һәм радио эфирҙарында үҙебеҙсә урынлы ғына итеп шаяртыу, көләмәс һәм лаҡаптар һөйләү һирәк күренешкә әйләнде. Көндәлек ваҡ мәшәкәттәргә күмелеп, ваҡыт үткәнен һиҙмәй ҙә йәшәйбеҙ. Ә бит башҡорт халҡының боронғо мәҙәктәре, көләмәстәре, көлөп, онотоп ҡына ҡуя торған әйбер түгел. Уларға бик тәрән мәғәнә, хатта философик фекер, аҡыл һалынған. Ата-бабаларыбыҙ һәр ситуацияның яҡшы, ыңғай яғын күрә белгән, беҙ ҙә уларҙан үрнәк алып, донъяға йылмайып бағайыҡ.

Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 2016 йылда ремонтланасаҡ төбәк һәм муниципаль-ара автомобиль юлдары участкаларының исемлеге раҫланды. Уларҙың дөйөм оҙонлоғо 407,3 саҡрым тәшкил итә. Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында әйтеүҙәренсә, 2010-2015 йылдарҙа юлдар һалыуға, төҙөкләндереүгә һәм тәртиптә тотоуға 57 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Быйыл 11 миллиард 157 миллион һум ҡаралған.

✓Быйыл Башҡортостан гидротехник ҡоролмаларҙы һәм хужаһыҙ ҡоролмаларҙы капиталь ремонтлауға, шулай уҡ һуңғыларын юҡ итеүгә федераль бюджеттан 39 924 мең һум аҡса аласаҡ. Ағымдағы йылда субсидияларҙың дөйөм күләме 5081,3 миллион һум тәшкил иткән.

✓Быйыл "Ватан" этник паркы 25 майҙа, "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале башланған мәлдә асыла. Яңы миҙгелдә паркты үҙгәрештәр көтә. Ҡунаҡтар этноауылға бушлай инә аласаҡ, шулай уҡ майҙансыҡта милли ризыҡтар менән туҡланыу урындары барлыҡҡа киләсәк. Ҡала проекттарын үҫтереү фонды паркта байрамдар, фестивалдәр һәм башҡа саралар үткәрергә теләүселәрҙе хеҙмәттәшлек итергә саҡыра. Ҡатнашыуҙың форматы төрлөсә булырға мөмкин: әҙер проект, сараның идеяһы һәм ойоштороуҙа ирекмән сифатында ҡатнашыу теләге. Ҡаланы үҫтереү үҙәге адресы- Менделеев урамы, 158.

✓Өфөлә "Урал ауазы" III Халыҡ-ара оркестрҙар һәм халыҡ уйын ҡоралдары ансамблдәре конкурс-фестивале үтте. Быйыл конкурста 30 коллектив ҡатнашты. Мәскәүҙән, Башҡортостандан, Сыуашстандан, Удмуртиянан, Мордовиянан, Татарстандан, Силәбе өлкәһенән, Приморье крайынан, Әзербайжандан, Ҡаҙағстандан, Белоруссиянан ҡатнашыусылар бар.

✓Өфөлә "Башҡортостан рустары соборы"ның IV съезы булды. Форумға республика ҡала һәм райондарынан 200-ҙән ашыу делегат килде. Көн тәртибендәге төп мәсьәлә - ойошма етәксеһенең һуңғы йылдарҙа башҡарған эше тураһында отчеты, ревизия комиссияһының яңы составын һайлау, башҡарма комитет составын яңыртыу. Сара сиктәрендә рус теле һәм мәҙәниәтенә, милләт-ара татыулыҡты, әхлаҡи проблемаларҙы нығытыуға бәйле мөһим мәсьәләләр тикшерелде.

“Башинформ”дан.

✓ *Бөгөн юлдарҙың насар булыуында кем ғәйепле? Беренсенән, насар асфальт һалыусы, икенсенән, власть ғәйепле. Тимәк, юлдар боҙолмаһын өсөн талаптарҙы дөрөҫ ҡуя белмәйбеҙ. Ошо йәһәттән аяуһыҙ эшләргә кәрәк.*

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ТАШҠЫНДАР ҺӘМ НАСАР ЮЛДАР...

Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфө буйлап эш сәфәре барышында ташҡынға ҡаршы штабтарҙың эшмәкәрлеге менән танышты һәм яҙғы ташҡынға әҙерлек мәсьәләләрен тикшерҙе.

Эш сәфәренең тәүге пункты яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау һәм тәртиптә тотоу буйынса махсуслаштырылған идаралыҡ булды. Унда республика Башлығы Өфөнөң Киров районындағы ташҡынға ҡаршы штабтың эше менән танышты. Билдәләнеүенсә, райондың Кооператив ялан һәм Өсөнсө пристань биҫтәләренә һыу баҫыу хәүефе янай. Әлеге ваҡытта ихаталар буйлап тикшереү һәм халыҡҡа инструкция таратыу тамамланған. 3 700 кешегә иҫәпләнгән 35 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты әҙерләнгән.

"Өфө" йылға порты" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең Нижегородка йөк терминалында Рөстәм Хәмитов Өфөнөң Ленин районындағы ташҡынға ҡаршы штабтың эшмәкәрлеге менән танышты һәм Нижегородка биҫтәһенең яр буйын ҡараны. Бында ла Нижегородка, Затон һәм Козарез биҫтәһендә йәшәүселәргә һыу баҫыу янауы хаҡында хәбәр иттеләр. Әлеге ваҡытта бында бөтә әҙерлек саралары тамамланған. Нижегородкала ғына ташҡынға ҡаршы өс штаб ойоштороlған. Биҫтәләге 577 йортто һыу баҫыуы ихтимал.

Артабан Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың Юл хужалығы идаралығы лабораторияһында булды. Бында уны төбәктәге автомобиль юлдары торошоноң мониторинг системаһы менән таныштырҙылар.

Башҡортостан Башлығы асфальт-бетонды, битум ҡатырғыс, ташлы материалдарҙы һынау өсөн лабораторияларҙың эшмәкәрлеге менән дә танышты. Идаралыҡ етәксеһе Фуат Хәлитов һүҙҙәренсә, 2014 йылда булдырылған Һынау үҙәге белгестәре юл төҙөүселәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләй, ваҡыты-ваҡыты менән сифатҡа контроль үткәрә. Етешһеҙлектәр асыҡланған осраҡта подрядсыларға штраф һалына, хатта килешеүҙәр өҙөлә.

Төбәк етәксеһе юлсыларҙы Башҡортостан юлдарында тәртип урынлаштырырға саҡырҙы.

- Оят! Бөгөн юлдарҙың насар булыуында кем ғәйепле? Беренсенән, насар асфальт һалыусы, икенсенән, власть ғәйепле. Тимәк, юлдар боҙолмаһын өсөн талаптарҙы дөрөҫ ҡуя белмәйбеҙ. Беҙгә стандарттарҙы ҡабул итеү өсөн бер йыл кәрәк булды. Республика юлдары - минең, һеҙҙең, вице-премьерҙың, ҡала, муниципалитет башлыҡтарының яуаплылығы, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов. - Һеҙҙән тәртип урынлаштырыуығыҙҙы талап итәм, бер кемде лә йәлләмәгеҙ. Иң яҡшыһы - намыҫһыҙ эшселәрҙең эшмәкәрлегенә сик ҡуйығыҙ. Ошо йәһәттән аяуһыҙ эшләргә кәрәк.

Рөстәм Хәмитов шулай уҡ "Газпромдорстрой Өфө төҙөлөш компанияһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте майҙансығын ҡараны һәм "НОВАЧИП" автомобиль юлдарын ремонтлауҙың яңы технологияһы менән танышты.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

СИТ ТЕЛДӘРҘЕ...

туған тел аша өйрәнеү отошло

Өфөнөң Һупайлы биҫтәһендәге 136-сы башҡорт лицейы 1994 йылда билдәле йәмәғәт эшмәкәре, педагог-мәғрифәтсе Мөхәмәтғәли Исҡужин тырышлығы менән асыла. Шуға күрә 2008 йылдан белем усағы уның исемен йөрөтә башлай. Әлеге көндә лицей республиканың иң көслө милли белем биреү учреждениелары рәтенә ингән.

Лицейҙы реконструкциялап, заманса техника менән йыһазландырғас, балаларын беҙгә уҡырға бирергә теләүселәр һаны артты. Лицейға уҡыусыларҙы башҡорт телен белеү кимәленә ҡарап һайлап алырға мөмкинлек барлыҡҡа килде. Ә бит белем усағыбыҙ эшләй башлағанда хатта ата-әсәләр үҙҙәре лә йүнләп башҡортса белмәй ине, күпселек балалар туған телендә һөйләшергә ояла торғайны. Хәҙер лицейыбыҙҙы тамамлаған йәштәр үҙҙәре саф башҡортса һөйләшкән балаларын беҙгә уҡырға алып килә - был беҙҙең эшебеҙгә ҙур баһа биргән күренеш булды, тип һанайым.

Ҡайһы бер ата-әсәләр балаһына туған телен өйрәтеүҙең әһәмиәтен аңлап етмәй. Ә бит туған телен белмәгән башҡортто үҙенекеләр ҙә ситләтә, башҡа милләт тә ҡабул итмәй һәм йыш ҡына ул балалар тормошта үҙ урынын таба алмай ҡаңғыра. Ғөмүмән, кеше ни тиклем күберәк тел белә, шул тиклем аң, белем кимәле үҫешә. Ун биш йыл тирәһе элек инглиз телен тәрәндән өйрәнеүсе синыфҡа уҡыусылар йыйҙыҡ һәм сит телде башҡорт теле аша өйрәтеү буйынса матур тәжрибә үҙләштерҙек. Был синыфта балалар бер нисә теүәл фәнде лә инглизсә уҡыны. Әлеге көндә шул уҡыусылар барыһы ла юғары уңыштарға өлгәште. Иң мөһиме, улар үҙ халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртҡан, үҙенең милли йолаларын үтәгән илһөйәр шәхестәр. Киләсәктә лә беҙ ошо юҫыҡта эште дауам итәсәкбеҙ.

Әлбиттә, бөгөн беҙ эшебеҙҙе тейешле закондар, талап ителгән стандарттар буйынса ҡалыпластырып, бер көйгә һалып алғанбыҙ. Шулай ҙа башҡорт милли белем биреү учреждениеларына туған телде уҡытыу, уның ғәмәлдәге ҡулланылышын нығытыу өсөн төрлө эксперименттар, яңылыҡтар индереп ҡарау мөһим нәмә. Артабан да үҫешеү, юғарыраҡ кимәлгә күтәрелеү, заман балаларын ҡыҙыҡһындырып уҡытыу ниәтендә уҡытыусыларға һәм етәкселәргә өҫтәмә рәүештә эшләргә, уҡытыу программаларын үҙгәртеп төҙөп ҡарарға, теория менән практик әһәмиәтен һынарға мөмкинлек булһа, шәп булыр ине. Ғөмүмән, 9-сы синыфҡа тиклем бөтә фәндәрҙе лә башҡортса уҡытырға, балаларҙы үҙебеҙсә фекерләргә өйрәтергә була. Әммә хәҙер ата-әсәләрҙе был аҙымды яһарға күндереүе ауыр, улар математика, физика кеүек теүәл фәндәрҙе артабан аңлауы ауырлашыр, тип хафалана. Был аңлашыла ла, сөнки һуңынан уҡыусыларға БДИ тапшырыу, юғары уҡыу йортона уҡырға инеү өсөн дә рус теле кәрәк. Ошо мәсьәлә буйынса лицейҙа үҙебеҙсә "алтын урталыҡ" таптыҡ: дәрестә теманы аңлатыу, фекер алышыу барышында уҡыусылар менән башҡортса һөйләшеүгә лә күсеп китәбеҙ. Дәрес ике телдә алып барылған кеүек килеп сыға, балалар темаға ла яҡшы төшөнә.

Лицейҙа уҡыусыларҙың үҙидаралыҡ советы бик уңышлы эшләй. Был "Лицей" тип аталған дәүләт балаларҙың ойоштороусы һәм лидерлыҡ сифаттарын асыуға, үҫтереүгә булышлыҡ итә. Уҡыусыларҙы ҙур тормошҡа өйрәтеү, таланттарын һәм мөмкинлектәрен асыу - үҙидаралыҡ советының төп маҡсаты. Бынан тыш, төрлө түңәрәктәр, матур саралар, ҡыҙыҡлы осрашыуҙар, төрлө олимпиадалар һәм конкурстар ярҙамында ла уҡыусыларҙың белем даирәһен арттырабыҙ. Бына шулай, сәмле, аҡыллы, маҡсатлы башҡорт балалары, киләсәктә милләтенә файҙалы шәхес булырлыҡ уҡыусылар тәрбиәләргә тырышабыҙ.

Шәмсулла ХӘБИБРАХМАНОВ,
М. Исҡужин исемендәге
136-сы башҡорт лицейы
директоры.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

МӘҘӘНИӘТКӘ - ГРАНТТАР

"Башҡортостан" дәүләт концерт залында республика Башлығының миллион һумлыҡ гранттарына дипломдар тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Бөтәһе 16 ижади проект дөйөм суммаһы 90 миллион һумлыҡ финанс ярҙамын алды.

"Музыкаль Өфө" Башҡортостандың профессиональ-музыкаль башҡарыу һәм вокаль сәнғәтен перспективалы үҫтереү ижади программаһы һәм Владимир Спиваков етәкселегендәге I Халыҡ-ара скрипкасылар конкурсы һәм Бөтә Рәсәй оҫталыҡ дәрестәре 13,5-әр миллион һумлыҡ грант алды.

URALFEST халыҡ-ара этник музыка фестивале, "Владимир Спиваков саҡыра" фестивале, "Бабич" тулы метражлы нәфис фильм төшөрөү, А. Меликовтың "Мөхәббәт хаҡында легенда" балет спектаклен ҡуйыу һәм "Көмөш Аҡбуҙат" III Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале 9-ар миллион һумлыҡ гранттарға тормошҡа ашырыласаҡ.

Рәсәй һәм халыҡ-ара сәхнәләрҙә "Орлан" этно-джаз ансамбленең "Башҡортостан илселәре" программаһын презентациялауға һәм режиссер Айнур Аҫҡаровтың "Өфөнән һөйөү менән" исеме аҫтында нәфис фильм төшөрөүгә 4,5-шәр миллионлыҡ грант бирелде.

Рудольф Нуриев исемендәге хореография училищелары (колледждары) халыҡ-ара фестивале, "Бөйөк мәғрифәтселәрҙең мираҫы" театраль-шиғри проекты, "Хәтер адресы - Воскресенск" (Воскресенск картиналар галереяһының 45 йыллығына) күргәҙмә һәм ғилми-ағартыу проектын ойоштороу 1,8-әр миллионлыҡ грантҡа лайыҡ булды.

"Урал ауазы" халыҡ-ара оркестрҙар һәм халыҡ уйын ҡоралдары ансамблдәре фестивале, Өфөлә "Рәсәй Рәссамдар союзының алтын коллекцияһы" күргәҙмәләр проектын (Мәскәү ҡалаһы) уҙғарыу, Заманса драматургия һәм режиссура республика семинар-лабораторияһын үткәреү, "Замандаш" фольклор-театраль экспедицияһын ойоштороу, Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале 900-әр мең һум алды.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә коммуналь фатирҙарға хаҡ төшмәгән. "Фатирҙар донъяһы" порталы мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы йылда баш ҡалала бүлмәләрҙең хаҡы 0,8 процентҡа артҡан. "Коммуналка"ның уртаса хаҡы 1 миллион 175 мең һум тәшкил итә. Сочиҙа бүлмәнең хаҡы - 2,8 миллион, Мәскәүҙә - 3,16, Санкт-Петербургта 1,8 миллион һум.

✓Өфөлә "Урал моңо" Халыҡ-ара фестивалендә республика исеменән сығыш яһаясаҡ йырсыларҙың исемдәре билдәле булды. Конкурс тыңлауҙары буйынса 13 ҡатнашыусы һайлап алынды. Улар - Өфөнән Заһир Зәйнетдинов, Рүзилә Йәмилева, Илдар Хәйруллин, Рәфис Сирусин, Радмир Хәсәнов, "Саптар" (етәксеһе Гүзәл Үмәргәлина) һәм "Ятаған" (етәксеһе Илдар Шакиров) этно-төркөмдәре, шулай уҡ республикабыҙҙың төрлө райондары вәкилдәре: Марат Әхмәҙиев (Октябрьский), Илдар Ямалов (Учалы), Олеся Лукина (Стәрлетамаҡ), Илмир Ҡоҙабаев (Благовар районы), "Тархан" (Сибай) һәм "Байымбәт" (Күгәрсен районы) этно-төркөмдәре.

✓Өфө аэропорты 28 марттан 29 октябргә тиклем яҙғы-йәйге расписаниеға күсте. Сочиға, Симферополгә, Анапаға, Геленджикка рейстар күберәк буласаҡ. Мәскәүгә осоштар һаны тәүлегенә ун өскә етә. Прагаға тура рейстар асыла, Истанбулға даими рейстар дауам итәсәк. Май айынан йәнә Барселонаға осорға мөмкин. Кипр, Греция, Болгария кеүек популяр туристик маршруттар ҙа һаҡлана. Һәр аҙна һайын Бургас һәм Ираклион, Монастирға (ун көнгә бер тапҡыр), Родосҡа (биш көн һайын) самолеттар осасаҡ. Пхукет, Бангкок, Камрань, Баҡы, Ташкент, Дүшәнбе һәм Худжанд кеүек йүнәлештәр ҙә бар.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә сираттағы тапҡыр биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләүсе әсәләрҙе бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Гүзәл заттарға "Әсәлек даны" миҙалын һәм аҡсалата премияларҙы Хөкүмәт вице-премьеры Салауат Сәғитов тапшырҙы. Республикабыҙҙа ошо юғары награда тапшырыла башлауға - 18 йыл. Бөгөн "Әсәлек даны" миҙалына лайыҡ булыусылар һаны ете меңдән ашыу.

✓Өфөлә йылғаларҙың боҙҙан әрселеү ваҡыты билдәле булды. Гидрометеорология шарттарын иҫәпкә алып, йылғаларҙың ғәҙәттәгенән ике-биш көнгә иртәрәк асылыуы көтөлә. 2-8 апрелдә - Ағиҙелдә, 31 мартан 6 апрелгә тиклем - Ҡариҙелдә, 6 апрелдән 12-нә тиклем Дим йылғаһында боҙ китеүе күҙаллана.

✓ *Шул арҡала Исламға ҡарата кире мөнәсәбәт тыуҙырыла. Быларҙың барыһы ла Ислам тәғлимәтенең ысын асылын аңламауҙан. Ә бының аңлатыу өсөн беҙҙең дин әһелдәре халыҡ менән осрашырға, аңлатырға, әүҙемерәк эшләргә тейеш.*

ФЕКЕР ҠОРО

Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт университетында "Башҡортостан Республикаһы киң мәғлүмәт сараларында Исламды яҡтыртыу мәсьәләләре" тип исемләнгән түңәрәк ҡор үтте. Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты тарафынан ойоштороолған кәңәшмәлә дин белгестәре, ғалимдар, дәүләт структуралары вәкилдәре һәм журналистар ҡатнашты.

ДӨРӨҪ ЯҠТЫРТЫУ ӨСӨН...

динде белеү кәрәк бит

Ҡорҙо асып, Башҡорт дәүләт университеты ректоры Николай Морозкин уҡыу йортонда 2014 йылдан бирле "Теология" йүнәлеше буйынса ғилми-уҡытыу үҙәге эшләүе тураһында белдерҙе: "Беҙ Ҡөрьән-Кәримде ғәрәп телендә уҡый белгән белгестәр әҙерләйбеҙ. "Теология" дисциплинаһы 2 йыл элек асылғайны, әле уның менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа, бюджет урындары ла арта", - тип, ҡайҙалыр Ғәрәп илдәрендә генә түгел, ә үҙебеҙҙә лә Ислам динен өйрәнеү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырылыуын, был заман талабы булыуын билдәләне.

Дәүләт һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет рәйесе Вячеслав Пятков Рәсәйҙә һәм республикала дин өлкәһендә һуңғы йылдарҙа башҡарылған эштәрҙе һанап үтте, ижтимағи-сәйәси хәл-торошҡа байҡау яһаны. Башҡортостанда, Уралда, Волга буйында йәшәгән халыҡтар тотҡан Исламды ул "игелекле, ғөрөф-ғәҙәтле" тип атаны. Вячеслав Петрович Яҡын Көнсығыш төбәктәге хәлдәргә лә туҡталды, үҙҙәренең шәхси мәнфәғәттәрен тормошҡа ашырыу өсөн Ислам динен нигеҙ итеп алыуға тиклем барып еткән ҡайһы бер төркөмдәр барлығын, ул төркөмдәргә теге йәки был сәбәптәр арҡаһында беҙҙең төбәк кешеләренең дә юлығыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ул шулай уҡ Ислам темаһын сағылдырыусы журналистарға үҙенең теләктәрен еткерҙе: "Дини өлкәләге ҡайһы бер күңелһеҙ хәлдәрҙе сағылдырғанда, мәғлүмәткә ҡарата иғтибарлы булығыҙ", - тип өндәште ул коллегаларға.

Өфөләге Рәсәй Ислам университеты ректоры, Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты вәкиле Артур хәҙрәт Сөләймәнов үҙ сығышында урындағы мәғлүмәт саралары дин өлкәһендәге ыңғай күренештәрҙе яҡтыртып һалып бармауы өсөн борсолоуын белдерҙе: "Күптән түгел Бөтә Рәсәй полк имамдары съезын уҙғарғайныҡ. Унда бөтә Рәсәйҙән ғәмәлдәге полк имамдарын саҡырҙыҡ, РФ Оборона министрлығынан да вәкилдәр килгәйне. Телевидениеларға беҙҙең тарафтан саҡырыу ебәрелһә лә, был сарала бер камера ла күренмәне", - тине һәм Ислам динендәге ошондай ыңғай күренештәрҙе, ысын Ислам позицияһын күберәк яҡтыртыу зарурлығына баҫым яһаны.

Билдәле журналист Зөфәр Тимербулатов Артур хәҙрәт Сөләймәновтың һүҙҙәренә яуап итеп, мәғлүмәт саралары хәбәрселәренең ҡалала, республика райондарында уҙғарылған бөтөн күркәм сараларҙа ла ҡатнашып өлгөрә алмауын, шунлыҡтан, төрлө ойошмаларҙа, шулай уҡ диниә назараттарында ла, матбуғат хеҙмәттәренең эшен йәнләндереү мотлаҡ икәнен белдерҙе. Уның һүҙен башҡа журналистар ҙа күтәреп алды. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты хеҙмәткәре Гөлназ Балағова, мәҫәлән, диниә назараттарындағы матбуғат хеҙмәттәре журналистар менән әңгәмәләр, осрашыуҙар ойоштороуҙары бармы, тип ҡыҙыҡһынды. Артур хәҙрәт Сөләймәнов был һорауҙы ҡыҙыҡлы тип тапты, киләсәктә ошо юҫыҡта эште йәнләндереү зарурлығын белдерҙе. "Тик бындай осрашыуҙарҙа ғына журналистарға дин тәғлимәтен ентекләп өйрәтеп булмағанлыҡтан, хәбәрселәр өсөн махсус курстар ойоштороу оҫталыҡ дәрестәренә ҡарағанда ла файҙалыраҡ булыр ине", - тине ул. Журналистарға ғына түгел, ә дингә арҡаланып, законға ҡаршы эшмәкәрлек алып барыусы төрлө элементтарға ҡаршы көрәшкән РФ Эске эштәр министрлығы йә прокуратура белгестәренә лә Ислам тәғлимәте буйынса дәрестәр үткәреү ҡамасауламаҫ ине, тигән фекер ҙә яңғыраны түңәрәк ҡорҙа. Юҡһа, Ислам темаһы күтәрелгәндә тик кире ваҡиғалар тураһында һөйләй киң матбуғат саралары һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары мәғлүмәттәре лә. Шул арҡала Исламға ҡарата кире мөнәсәбәт тыуҙырыла. Быларҙың барыһы ла Ислам тәғлимәтенең ысын асылын аңламауҙан килеп сыға. Ә бының аңлатыу өсөн беҙҙең дин әһелдәре, бигерәк тә Өфөлә урынлашҡан Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты, Башҡортостан мосолмандары диниә назараты белгестәре халыҡ менән осрашырға, аңлатырға, әүҙемерәк эшләргә тейеш.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Дин дәүләттән айырым йәшәгән ваҡыттар артта ҡалды. Хәҙер дәүләт - дингә, дин - дәүләткә таяна, тиһәк тә хата булмаҫ. Әммә шуныһы: дин сәйәсәт менән буталмаһын, сәйәсәт тә кешенең күңеленә дин аша тәьҫир итергә ынтылмаһын, алтын урталыҡ тотолһон ине. Әлеге түңәрәк ҡор ошо ынтылыштың бер сағылышы булыр, моғайын.

Байым РӘХИМЙӘНОВ.

БАШ ЙОРТТА

ӨФӨНӨҢ ЙӨҘӨ ҮҘГӘРӘ...

Өфө ҡала округы хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығы начальнигы, ҡаланың баш архитекторы Илдар ИБРАҺИМОВ журналистарҙы ҡала төҙөлөшө документацияһына үҙгәрештәр индереү һәм ағымдағы йылда баш ҡалала атҡарыласаҡ комплекслы төҙөлөш планы менән таныштырҙы.

Кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, Өфө Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығы былтыр 55 проект эшләгән. Ул проекттарҙың 21-е - буш ятҡан ерҙәрҙә төҙөлөш объекттары планлаштырыуҙы, 34-е бөгөнгәсә хеҙмәтләндерелә килгән күп ҡатлы йорттар территорияларын межалауҙы үҙ эсенә алған. Илдар Фәнис улы баш ҡаланың генераль планына ингән һәм яҡын киләсәктә атҡарыласаҡ иң эре бер-нисә проект менән дә таныштырып үтте һәм: "Өфө халҡының 83 процентының "Өфө ярымутрауы"нда йәшәүен, шулай уҡ ошо майҙанда авария хәлендәге, емереү йә яңыртыу талап ителгән биналар булыуын иҫәпкә алып, ҡала төҙөлөшө стратегияһы башлыса Өфө ярымутрауында төҙөкләндереү, межалау эштәре алып барыуға йүнәлтелгән", - тип билдәләне.

Илдар Фәнис улы ҡала мөхитен үҫтереү барышында социаль объекттарға ла төп иғтибар бүленеүен әйтеп үтте. Мәҫәлән, торлаҡ кварталдары планын ҡағыҙға төшөргәндә документацияға мотлаҡ автомобиль туҡталҡалары проекттары ла индерелә. Әйтәйек, Ленин районының "Көнсығыш Затон" торлаҡ биҫтәһенең көньяҡ өлөшөндә 1 миллион квадрат метрға иҫәпләнгән төҙөлөш эштәре проекты ҡаралған, унда мәктәп, балалар баҡсаһы ла төҙөү күҙаллана.

Архитектор билдәләүенсә, ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек барышында Өфөнөң үҙәк урамдары төҙөкләндерелһә, хәҙер иһә уларҙың төп иғтибары ҡаланың төньяҡ өлөшөнә - Орджоникидзе районына йүнәлтелгән. "Был районда яңыртыуҙы талап иткән ике ҡатлы йорттар бихисап, улар бер ниндәй ҡиммәткә лә эйә түгел. Шулай ҙа халыҡта "Восьмиэтажка" тип исемләнгән, Өфө ҡалаһының тарихын, мәҙәниәтен сағылдырған был йорт-то беҙ һаҡларға бурыслы. Әйткәндәй, Өфөләге тарихи, мәҙәни әһәмиәткә эйә йорттарҙы һаҡлау кәрәклеген беләбеҙ. Йорттоң архитектура ҡомартҡыһы булыуын дәлилләгән документы бар икән, ул йорттарҙы төҙөкләндереү эштәре киләсәктә лә дауам итәсәк", - тине Илдар Фәнис улы.

Кәңәшмәлә шулай уҡ ошо өлкәләге ҡайһы бер етешһеҙлектәр ҙә телгә алынды: "Ҡайһы бер торлаҡ комплексы төҙөүселәр, заказ биреүселәр алдан раҫланған проект документацияһына таянып эш итмәгәнлектән, аңлашылмаусанлыҡтар ҙа килеп сыға, - тине Илдар Фәнис улы. -Заказсының, төҙөүсенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығы менән кәңәшләшмәйенсә, ерҙе межаламай ғына йорттар төҙөргә тотоноуы арҡаһында йәмәғәтселектә ризаһыҙлыҡ барлыҡҡа килеү осраҡтары ла бар".

Осрашыуҙа Өфө ҡалаһында барлыҡ үҙгәрештәр ҙә кешегә уңайлыҡтар тыуҙырыу, йәшәү шарттарын яҡшыртыу өсөн эшләнеүе тураһында әйтелде. Әммә архитекторҙар күҙаллаған проекттарҙың иҡтисади көрсөк арҡаһында оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән булыуы ла иҫкәртелде. Тимәк, Өфө барыбер ҙә яңыра, үҫә, матурая.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Хәтерҙе нығытыу

❖ Ҡан тамырҙарын таҙартыу һәм хәтерҙе нығытыу өсөн дауа: 6 лимон һуты, 1 баш иҙелгән һарымһаҡты ҡушып болғатырға ла, марля салфетка менән ҡаплап, 2 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. 1 балғалаҡ төнәтмәне 1 стакан һыуға болғап, иртән ас ҡарынға эсергә.

Иммунитет өсөн

❖ Иртән ғәҙәти сәй урынына корица ҡушылған сәй эсегеҙ. Ул организмды таҙарта һәм иммунитетты нығыта. Ҡайнар һыуға 1 киҫәк лимон һәм бер семтем корица һалырға, һыу бер аҙ һыуынғас, 1 ҡалаҡ бал болғатып эсәбеҙ.

❖ 2 лимондың тышын ҡырғыста ҡырырға, 200 грамм шәкәр ҡушып болғатырға. 4 лимондың һутын һығырға, шәкәрҙе ҡушып, болғатырға. 4 йоморткаһы сәнскес менән күпертмәй генә туҡырға, һутҡа өҫтәргә һәм ярты сәғәткә ултыртып торорға. Һөҙгөргә һәм кәстрүлгә ҡойорға, 40 грамм аҡ май өҫтәргә, талғын утта 3-5 минут ҡуйырғансы ҡайнатырға. Һыуытырға һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Лимондың ҡабығында С витамины күп, ул капиллярҙарҙың торошон яҡшырта. Лимон бауыр эшен көйләй, йоморткала холин бар, ул шулай уҡ бауырға файҙалы. Аҡ майҙа А витамины күп. Был лимонлы майҙы вирустар әүҙемләшкән мәлдә ҡулланыу тағы ла яҡшы.

Ҡара торма

❖ Юғары ҡан баҫымынан: 1 стакан ҡыҙыл сөгөлдөр һутына 1 стакан ҡара торма һуты ҡушырға, 200-әр грамм бал, мүк еләге һуты өҫтәргә. Ашарҙан 1 сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Бөйөр сирҙәренән: ҡара торма һутын бал менән ҡушып болғатып, көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ Һалҡын тейгәндә: ҡара торма һутын бал менән ҡушып, бөйөр сирен дауалағандағы схеманы ҡулланып эсергә. Шулай уҡ ҡара торманың уртаһын алып, уға шәкәр йәки бал тултырып, бүленеп сыҡҡан һутты 1-әр ҡалаҡлап һәр сәғәт һайын эсергә була.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ *Һуғыш самбоһы буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы, ҡатнаш алыш төрҙәре буйынса донъя турнирҙарында күп тапҡырҙар еңеү яулаусы "Башҡорт" ҡушаматлы Венер Ғәлиев Екатеринбургтан Өфөгә тренер булып ҡайтырмы?*

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

ҠАРҒА БУТҠАҺЫ

"Ҡарға бутҡаһы" байрамын үткәрер алдынан ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, әбей-һәбей йыйылып кәңәш-төңәш итәләр. Байрамды ҡайҙа, ҡайһы көн үткәреү, уға ҡайһы ауылдарҙан кемде саҡырырға һуҙ беркетәләр. Үткенерәк еткән ҡыҙҙарҙан, килендәрҙән сыҡырыусылар һайлана.

"Ҡарға бутҡаһы" - халыҡ байрамы. Әммә унда ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡатнаша ала. Бешерем-төшөрөм, бәйгеләрҙә еңеүселәрҙе бүләкләү сығымдарын да бергәләп күтәрәләр. Ауыл буйлап бүләк, ярма, май, йомортҡа йыйыусыларҙы алсабырҙар тип йөрөтәләр. Алсабыр итеп ауылда абруйлы, һүҙе үтемсәк, үҙе күңелсәк, йыр, бейеү оҫтаһы булғандай әбейҙәрҙе һайлайҙар.

Ауыл буйлап бүләк, ризыҡ йыйғанда, алсабырҙар сағыу-сағыу күлдәктәр кейеп, биҙәкле таяҡтар таянып, һамаҡлай-һамаҡлай йөрөйҙәр. Уларға бала-саға эйәрә. Улар шулай тип ҡысҡырыша:

- Ҡарға әйтә: "Ҡар, ҡар!
Ҡарғатуйға бар, бар!
Ҡарғатуйға бармағандың
Күңеле булыр тар, тар,
Күңеле булыр тар, тар -
Ҡарғатуйға бар, бар!"

Һабан туйында, "Ҡарға бутҡаһы"нда һәм йыйындарҙа тәүҙә башлап йөрөүсе һайлап ҡуялар. Ул сая ла, ғәҙел дә, телгә лә оҫта булырға тейеш. Шул кешене юлбарсы тип йөрөтәр булырҙар. Байрам мәлендә әллә ҡайҙан таныулы булһын өсөн юлбарсы үҙенсә айырым кейенгән. Ул ир кеше булһа (һабантуйҙа), башына ҡырпыулы бүрек, өҫтөнә суҡлы эңербаулы аҡ күлдәк кейә. Билен ике осо ла суҡланған ҡыҙыл билбау менән быуа. Ә ҡатын юлбарсы (ҡарға бутҡаһында, көкүк сәйендә һ.б.) сыбар күлдәк, еңһеҙ ҡыҙыл бишмәт кейә. Бишмәте шау тәңкә була, арҡаһына ике төрлө яулыҡ ябына: береһен яҙып ябына, береһен - кире ҡайтарып тарта. Яулыҡтарына ялтыр көмбәҙҙәр баҫылған була. Башына бейек көләпәрә (башлыҡ) кейә.

Бутҡа бешергәндә:

- Бут-бут, бутҡа бешә,
Уртаһына сыҫкан төшә.
Бут-бут, бутҡа бешер,
Уртаһына сыҫкан төшөр.
Бут-бут, бутҡа бешә,
Беҙҙең бутҡа майһыҙ бешә.
Бут-бут, бутҡа бешер,
Бутҡаң янына мине саҡыр, - тигән һүҙҙәрҙе әйтәләр.

Аш бешкәнсе, әбей-һәбей бейей:

- Иләк менән иләп тор,
Күнәк менән ҡойоп тор,
Иләк менән иләп тор,
Күнәк менән ҡойоп тор, - тип һамаҡлайҙар. Шунан ямғыр теләйҙәр:

Бутҡаны ашағас, ҡалған-боҫканын:

- Ҡош-ҡорттар ырыҫынан,
Етем-йәһерҙәр ырыҫынан, -
Ҡарғалар ырыҫынан, - тип, таштарға, ағастарға һалып сығалар.

Борон: "Ҡарға ҡарҡылдаһа, ямғыр була", - ти торғайнылар. Шунан ҡарға ҡарҡылдай башлаһа:

- Ямғыр яуҙыр,
Ямғыр яуҙыр.
Ямғыр яуҙырһаң,
Ауыҙыңа май булыр, - ти торғайнылар. "Ҡарға бутҡаһы" байрамында ла шулай тиҙәр.

"Башҡорт халыҡ ижады"нан.
(Дауамы бар).

ЗАМАН БАШҠОРТО

ТӘБИҒӘТЕ МЕНӘН - КӨРӘШСЕ,

булмышы менән - еңеүсе

(Башы 1-се биттә).

Юғарыла килтергән мәғлүмәттә беҙ "Комсомольская правда" гәзите редакцияһында Венер Ғәлиев, ойоштороусылар һәм тағы бер нисә спортсы ҡатнашлығында үткән матбуғат конференцияһы барышында белдек. Унда "FIGHT NIGHT" ойоштороусы-компания генераль продюсеры, ҡатнаш һуғыш төрҙәре сәнғәте буйынса Мәскәү ҡалаһы Федерацияһы вице-президенты Камил Гаджиев та ҡатнашты һәм күптәрҙең хәтерендә ҡалырлыҡ ошондай фекер әйтте:

- Минең уйымса, халыҡ-ара кимәлдәге шоу республика өсөн ныҡ файҙалы. Ә Өфөлә ошо төбәк егетенең сығышы иһә икеләтә әһәмиәтле. Был көрәште тамаша ҡылыуҙан бер кем дә ситтә ҡалырға тейеш түгел. Сөнки үҙ батырыңды күтәрмәләү - намыҫ эше, рух эше, сәм эше, ғәм эше. Һеҙҙең алда бөтөн республика менән үҙ көрәшсегеҙгә рухи ярҙам күрһәтеү бурысы тора. Төрлө сәбәптәр арҡаһында "Өфө-Арена"ға килә алмағанһығыҙ икән, ярышты телевизорҙан булһа ла ҡарағыҙ. Был көндә бөтөн Өфө, бөтөн Башҡортостан: "Беҙҙең чемпион ситтән килгән чемпионға ҡаршы тора бит", - тип, дәррәү күтәрелһен ине. Турнир Башҡортостанда спортты үҫтереүгә булышлыҡ итһен, тиһәгеҙ, Венер Ғәлиев сығышын ҡарағыҙ, ул саҡта йөрәгеҙҙә дәрт осҡоно ҡабыныр, ул осҡон һеҙҙән башҡаларға күсер...

Кем һуң ул Венер Ғәлиев? Әлеге ярышҡа ул нисек әҙерләнә? Һүҙ арбабыҙ тәртәһен чемпион ҡапҡаһына борҙоҡ. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.

Хәрәкәттә - бәрәкәт

Кешегә иң зур этәргес бирә торған көстәрҙең береһе - ғәҙәт. Спорт минең өсөн күптән инде йәшәү рәүешемә, ғәҙәтемә әйләнгән. Тренерҙы кемдер уҡыусыларының күнекмә үтеүен ҡарап, уларға бойороҡтар биреп, ситтәрәк тороусы бер кеше итеп кенә күҙ алдына килтерәлер. Мин көн һайын тәрбиәләнеүселәрем менән "бер ҡаҙанда ҡайнайым", рингҡа баҫып, ҡушлап төртөшәм. Бының икенсе сәбәбе лә бар: теге йәки был алымды, күнекмә өлөшөн телдән аңлатыуға ҡарағанда, уның үҙең эшләп күрһәтеүе еңелерәк.

Көн дә күнекмәләр эшләһең, физик торошоң да, һаулығың да яҡшы була. Мине төрлө ярыштарҙа ҡатнашыу ҙа үҙенә ылыҡтыра. Көндәлек тормош, ғаилә ығы-зығыһы, эш ялҡытып та китә бит. Ир-егеттәр, ғөмүмән, һәр саҡ яңылыҡ эҙләргә тейеш. Сөнки улар тәбиғәте менән көрәшсе, булмышы менән - еңеүсе. Яңы киселерештәрҙе мин спорт менән шөғөлләнеүҙән алам. Кемдер минең йәшәү рәүешемә сәйерһенеп ҡарар, һәр кемдең үҙ фекере, үҙ иманы, тигәндәй. Мин спорттың бөтөн уйын төрҙәрен дә үҙ итәм. Футбол, хоккей, баскетбол, теннис, сноуборд менән ҡыҙыҡһынам. Бынан тыш, китап уҡырға, музыка тыңларға яратам. Әйткәндәй, ҡала ерендә үҫкәнгәлер, туған телемдә етерлек кимәлдә иркен аралаша алмайым. Шуға ла киләсәктә башҡорт телен яҡшыраҡ үҙләштерергә ниәтем бар...

Бар спортты ла үҙ итәм…

Бала сағымда ҡатнаш һуғыш төрҙәре сәнғәте лә, һуғыш самбоһы ла юҡ ине. Был спорт төрҙәре һуң ғына балыҡҡа килде. Тәүҙә грек-рим көрәшен өйрәндем. 20 йәшемдә ҡатнаш һуғыш төрҙәре килеп сыҡҡас, үҙемде ошо өлкәлә лә һынап ҡарарға булдым. 32 йәшемдә һуғыш самбоһы ярыштарына саҡырҙылар. Һуғыш самбоһы буйынса бер-бер артлы еңеү яуланым. Рәсәй чемпионатында ла еңеп сыҡтым. Барыһы ла үҙенән-үҙе килеп сыға ине. Бер спорт төрөнән икенсе спорт төрөнә күсеү ауырлыҡ тыуҙырманы. Әйткәндәй, Америка ғалимдары ҡатнаш һуғыш төрҙәрен өйрәнеү өсөн иң ҡыйын спорт төрө тип иҫбатлай. Быны үҙем дә һынағаным бар. Унда сыҙамлыҡ та, көс тә, хәрәкәт теүәллеге лә, фекерләү ҡеүәһе лә талап ителә. Бөтөн яҡтан да үҫешкән булырға кәрәк.

Дәғүәсеңдән ҡурҡмау өсөн

Ҡурҡыу дәғүәсеңдең нимә эшләргә теләүен аңламауҙан барлыҡҡа килә. Уны күнекмәлә генә аңлап була. Күп шөғөлләнһәң, ярыш ваҡытында зиһенең асылып китә. Юғиһә, хәл иткес мәлдә кеше ҡапыл ғына аныҡ фекергә килә алмаҫҡа ла мөмкин. Үҙеңде алдан әҙерләһәң, ғәҙәттә, дәғүәсеңдең нимә эшләргә теләгәнен алдан белеп, унан бер аҙымға алдараҡ хәрәкәт итәһең. Башҡа уйҙарыңды ситкә ҡуйып тораһың да, һөҙөмтә өсөн генә тырышаһың. Алыш ваҡытында миндә нәфрәт тә, агрессия ла булмай. Мин хатта дәғүәсемде шәхес итеп тә ҡабул итмәй башлайым. Бары тик үҙемдең "эшемде" генә башҡарам. Бында холоҡ үҙенсәлеге лә һөҙөмтә бирәлер, моғайын. Көрәшселәр төрлө-төрлө була, әлбиттә.

Иртә ҡабынғандар тиҙ һүнә…

Мин көрәшкә һуң килдем. "Һинең тырышып йөрөүеңдән ни фәтүә сыҡһын инде, ваҡытыңды бушҡа әрәм итәһең бит", - тигән "кәңәштәр" ҙә ишетелеп-ишетелеп ҡала ине. Ә мин башлаған саҡта "йондоҙ" булған йәштәр 18 йәшкә етә килә һүлпәнәйҙе лә ҡуйҙы. Был психологиямы ул, әллә башҡа берәй сәбәп бармы, уныһы минә ҡараңғы. Иртә ҡабынған "йондоҙ"ҙар үҙҙәренә талапты "бушатып" ебәрә шикелле. Ә "күләгәлә", йөрөгәндәр үҙ өҫтөндә эшләүҙе дауам итә һәм, иртәме, һуңмы - уңышҡа өлгәшә.

Ринг һәм тормош - икеһе ике нәмә

Ярышҡа әҙерләнәһең, күнекмә эшләйһең, ә тормошта... Урамда үҫкән һуғышсылар бар. Улар урамда үҙҙәрен иркен тотһа ла, майҙанға сыҡһа, ни эшләргә белмәй, баҙап ҡала, "яна" ла ҡуя. Ни өсөн тигәндә, уларҙа алышҡа әҙерләнеү ғәҙәте юҡ. Алыш тәү ҡарашҡа ғына еңел һымаҡ. Иғтибарыңды кәрәк йүнәлешкә йүнәлтә белмәһәң, "янаһың". Һүҙемдең аҙағында шуны әйтке килә: төптән уйлап ҡараһаң, һинең ниндәй спорт төрө менән шөғөлләнеүең артыҡ мөһим дә түгел. Иң әһәмиәтлеһе шул - үҙеңә эске ҡәнәғәтлек тойғоһо биреһә, шул еткән.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Һуғыш самбоһы буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы, ҡатнаш алыш төрҙәре буйынса донъя турнирҙарында күп тапҡырҙар еңеү яулаусы "Башҡорт" ҡушаматлы Венер Ғәлиев Екатеринбургтан Өфөгә тренер булып ҡайтырмы? Әйтеүе ҡыйын. Әммә 22 апрелдә Өфө-Аренала үҙ тамашасыһына бик ҡыҙыҡлы алыш вәғәҙә итә ул.

Илгиз ИШБУЛАТОВ
яҙып алды.

✓ *Тимәк, венгр һүҙе өвез башҡортса урап, әйләндереп алынған тигәнде аңлата. Өфө ҡалаһының картаһына күҙ һалһаҡ, Өфөнөң өс яҡтан Ағиҙел һәм Ҡариҙел (Уфа) менән уратып алынғанын күрербеҙ.*

ФАРАЗДАР

Өфө... Халҡыбыҙҙың күңеленә уйылған билгеле лә, серле лә атама. Ул - илйортобоҙҙоң, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһының атамаһы. Йәмле һыу буйҙарында, сағыу сағылда балҡыған был ҡала беҙ яратҡан йырҙарҙа данлана. "Матур Өфөм минең, нурлы Өфөм; яҡты Өфөм минең, алтын Өфөм; гүзәл Өфөм минең, ғәзиз Өфөм" тип шағир рухлана, "Күргән һайын һине шатланам, ҡайҙа барһам, һиңә ашҡынам", тип йөрәк хистәрен тирбәлдерә. Йылы хистойғо халыҡ йырында ла белдерелә: "Өфө ҡайҙа, Өфө ҡайҙа, Өфө Урал яғында, ҡоштар булып осор инем, бик һағынған сағымда". Йәшәргә дәрт-ҡөҙрәт тә, ижадҡа илһам, күтәренке рух та бирә мәшһүр Өфө.

НИ ӨСӨН "ӨФӨ" ТИП АТАЛА?

Атаманың килеп сығышына тағы бер аңлатма

Көньяҡ Уралдың археологияһы, этнографияһы, тарихы тураһында хеҙмәттәр яҙған күренекле урыҫ тарихсыһы Петр Иванович Рычковтың (1712-1777) мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Өфө, ҡәлғә булараҡ, Ҡаҙан ханлығы тар-мар ителгәндән һуң (1552), йәғни 1554 йылда барлыҡҡа килгән. Бығаса ныҡытма ошондағы тау исеме менән Тыратау (Торатау) тип йөрөтөлгән, тиҙәр. Һис шикһеҙ, бығаса ла әллә ҡасан ҡәлғә, ҡала булған.

В. Путенихин иһә Уфа тигән фекерҙә. Ҡаласыҡ имән менән уратып алынғанлыҡтан, башҡорттар уны "Имән ҡала" тип тә атаған. Ҡала итеп иһә Өфө 1586 йылдан ғына иҫәпләнә. Мәгәр П.И. Рычковтың уйлауынса, Өфө атамаһы яңынан бирелмәгән, Башҡортостан Рәсәй дәүләтенә ингәндән байтаҡ элек үк булған әүәлге ҡаланығытманың исеме тергеҙелгән генә. Урыҫ документтарында Өфө атамаһы XVI быуат башында уҡ сағылыш тапҡан, Иван III менән һөйләшеү өсөн Ҡаҙан ханының "уфимский кенәз"ен Мәскәүгә ебәреүе телгә алынған.

Өфө һүҙенең килеп сығышы тураһында фараздар, аңлатмалар байтаҡ. Риүәйәттә һөйләнеүенсә, бер күсеп килеүсе ҡаласыҡҡа ҡарай Ағиҙелдең текә ярын менгәндә арып-талып "Уф!" тигән һәм, йәнәһе, шул ымлыҡтан Өфө (Уфа) хасил булған. Ләкин был һүҙҙең сығышына һәм ауыр хистойғонан әйтелгән уф, уфф-ф ымлығынан тыш, өф булыу, өф итеү һүҙҙәре лә бар. Мәгәр уларҙың да Өфө атамаһы менән мәғәнәүи бәйләнеше юҡ.

Топонимиканы өйрәнеүселәр, тарихсылар, телселәр Өфө атамаһының нөсхә үрнәген төрки, фин-уғыр телдәренән ныҡышмалы эҙләне. Байтаҡ уй-фараздар "Башҡорт АССР-ының топонимдар һүҙлеге" йыйынтығында (1980) сағылдырылған: Өфө атамаһы башҡорт ырыуы башлығы Әфтәбей исеменән (Ғ. Вилданов, 1930); уфа "ағастан яңы һалынған йорт" тигән венгр һүҙенән (М.В. Лоссиевский, 1883); уфа "ҡара һыу" тигән башҡорт һүҙенән (В.И. Филоненко, 1957); ире "йылға"ны аңлатҡан балтика халыҡтары һүҙенән (Ф.И. Гордеев, 1967); ар "һыу" төшөнсәһен белдергән боронғо иран һүҙенән (М.Т. Мөьминов, 1969); өпәй башҡорт этнонимынан (А. Камалов, С. Ҡасимов, 1967). Был аңлатмалар ныҡлы дәлилһеҙ күҙәмәгә ҡоролған ҡараш ҡыналыр, тип уйлайым.

Өфө атамаһының мәғәнә айышын асмаған башҡа фараз итеүҙәрҙе лә ҡарап үтәйек. Йәнәһе, Балтика ырыуҙарының береһе ҡасандыр Мәскәүҙән көнбайыштараҡ көн иткән, Өфө исеме литва һәм латыш телдәрендәге упэ -"йылға" һүҙенән килеп сыҡҡан. Башҡорт ырыуы Өпәй исемен бүлеп, Пермь фин-уғырҙарының ювa һүҙенән килеп сығышына ла ишаралайҙар: ю - "йылға", ва - "һыу".

Филология фәндәре докторы А.К.Матвеев Өфө һүҙенең тәүсығанағын иран телдәрендә эҙләүҙең ҡыҙыҡлы икәнен белдерә. Уның яҙыуынса, борон Көньяҡ Уралда йәшәгән скиф-сармат ырыуҙары телендә ап - "һыу" һүҙе булған. Ул хәҙер тажик телендә об - "һыу" рәүешендә һаҡланған. Бәлки, йәнә Обь йылғаһы атамаһында ла күренәлер. Боронғо скифтарҙың нәҫеле осетиндарҙың телендә ап "аф"ҡа һәм "ах"ҡа күскән һәм Ираф йылғаһы (Осетин һыуы) исемендә әле лә яңғырай. А.К. Матвеевтың фараз итеүенсә, хәҙерге Урал атамаһына Арал йәки Орал тауының боронғо рәүеше тәү сығанаҡ булған икән, иран һүҙе "аф"тың йәки "оф"тың беҙҙең заманға Өфө (Уфа) рәүешендә килеп етеүе, моғайын, ғәжәп түгелдер. Мәгәр ҡайһы халыҡ а өнөн у өнө иткәндер? Бәлки, боронғо болғарҙарҙыр. Ф өнөнә килгәндә, ул иран телдәренә ғәҙәти.

А.Н. Сергеев 1876 йылда ҡала исемдәренең килеп сығышын аңлатҡан яҙмаһында Өфө атамаһын башҡорт һүҙе уба (ҡалҡыу ер) менән сағыштыра. Убаға ауаздаш исемдәр алтай ғаиләһенә ҡараған башҡа телдәрҙә лә бар. Йәнә Өфөнөң башҡорт диалекттарында Өфө, Өпө рәүешендә әйтелеүен миҫалға килтереп, атаманың уба һүҙенән килеп сығыу ихтималлығын фараз ҡылалар. Мәгәр шуны ла онотмайыҡ, төп башҡорт һүҙҙәрендә х һәм ф өндәре бөтөнләй юҡ.

Хәҙер әлегесә Уралдың географик атамалары һүҙлектәрендә лә, башҡа ғилми хеҙмәттәрҙә лә әйтелмәгән Өфө һүҙенең килеп сығышының ысынбарлыҡҡа яҡын яңы аңлатмаһын яҡтыртайыҡ. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында Баймаҡ ерендә тыуып үҫкән Данил Ҡаһарманов менән бергә уҡыныҡ. Педучилище тамамлаған, мәктәптә уҡытҡан, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан егеттәрбеҙ. Данил иһә Венгрияла хеҙмәт иткән, унда венгрҙар, венгр ҡыҙы менән дуҫлашҡан. Тыуған иле Башҡортостан тураһында һөйләгән, уның баш ҡалаһы Өфө булыуын әйткән. Венгрҙарҙан иһә кемдер Өфөнөң венгр һүҙе өвез икәнен белдергән.

Мин Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Республика китапханаһынан венгр-рус һүҙлеген алып ҡараным. Унда ovezni (-ett-zen) опоясывать (опоясать; roruivenni) окружать, тип аҡҡа ҡара менән яҙылған. Тимәк, венгр һүҙе өвез башҡортса урап, әйләндереп алынған тигәнде аңлата. Һәр ҡайһы-быҙға билдәле булғанса, Өфө ҡалаһы Ҡариҙел һәм Дим йылғаларының Ағиҙелгә ҡушылған ерендә урынлашҡан. Өфө ҡалаһының картаһына күҙ һалһаҡ, Өфөнөң өс яҡтан Ағиҙел һәм Ҡариҙел (Уфа) менән уратып алынғанын күрербеҙ.

Венгр теле фин-уғыр телдәре ғаиләһенә ҡарай. Олуғ ғалим Жәлил Кейекбаев яҙыуынса, Дунай йылғаһы үҙәндәрендә йәшәгән хәҙерге венгрҙар бик боронғо замандарҙа Көньяҡ Уралда һәм Ағиҙел - Кама буйҙарында йәшәгән.

Шул да мәғлүм: әлеге Венгрия еренә венгр-һунғар йәғни мадьяр ырыуҙары IX быуат аҙағында барып урынлашҡан, улар менән бергә ҡайһы бер башҡорт ҡәүем-ҡәрҙәштәребеҙ ҙә күсенгән. Венгрҙарҙың нәҫелдәре Башҡорт илендә лә тороп ҡалған. Улар башҡорттар менән тығыҙ аралашҡан, башҡортлашҡан. Яйыҡ буйында Мадьяр исемле ҡәрҙәштәребеҙ ҙә бар. Венгр һәм башҡорт халыҡ ижадында уртаҡ әкиәттәр, телдәрендә дөйөм һүҙҙәр байтаҡ. Башҡортостанда венгрса аталған ер-һыу, ауыл атамалары ла осрай. Венгр телсеһе В. Проле Өфө губернаһына килеп, башҡорт теле буйынса мәғлүмәттәр йыйған һәм башҡорт телен фәнни яҡтан өйрәнгән. Ул "Башҡорт нельф" ("Башкорт теле") тигән китап яҙған, венгрса-башҡортса һүҙлексә лә төҙөгән һәм бер йыйынтыҡ булып 1904 йылда Будапештта баҫылған. Һүҙлексәлә һөйләү телендә киң ҡулланылған венгр һүҙҙәренең башҡортсаға ярашлылары бирелгән.

Йомғаҡлап шуны әйтәйек, Өфө һүҙенең венгр һүҙе өвез менән мәғәнәүи йәһәттән ярашлы булыуына бер ниндәй ҙә шик юҡ.

Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

Иван ЛЕПЕХИН

XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Унда барып еткәндә, ағастарға бәйләп ҡуйылған бик күп эйәрле аттарҙы, ә бер тирмә янында күбәләй өйөлөшөп күренеп торған кешеләрҙе күрҙек; яҡыныраҡ килгәс, беҙгә халыҡ өйөрө булып күренгән кешеләрҙең бик тәртипле икәненә төшөндөк. Башҡорттар балаҫ менән ябылған махсус эскәмйәләрҙә остары мәрхүм тирмәһенә терәлеп торған өсмөйөш рәүешендә ултыралар ине. Йыйылыш уртаһына ошондай уҡ баластар түшәлгән, улар өҫтөндә, ҡымыҙ менән тулы турһыҡтарын эргәләренә ҡуйып, мәрхүмдең туған-тыумасаһы ҡырын төшөп ятҡан. Өсмөйөштөң башында старшина урын алған: ян-яғында ултырған ике мулла мәрхүм өсөн доға ҡыла башланы; йыйылған башҡа халыҡ уға ҡушылды. Уларҙың ошолай доға көйләүе беҙ килгәндән алып бер сәғәт тирәһе дауам итте. Доға ҡылыу тамамланғас, ҡымыҙ тарата башланылар. Бында һәр кем уны ҙур туҫтаҡтарҙан һемерҙе; беҙгә лә ошо башҡорт нектары тәҡдим ителде: әммә беҙ унан баш тарттыҡ, был башҡорттарға беҙгә ҡарата бер ни тиклем ризаһыҙлыҡ белдереү өсөн сәбәп булды. Ҡымыҙ эсеп бөткәс, мәрхүмде иҫкә алыу мәжлесе башланды, унда килеүселәрҙең барыһы ла ҡатнашты. Һыйҙы йылҡы ите һәм Биш Бармаҡ (автор был һүҙҙе баш хәреф менән яҙа. - **Ред. иҫк.**) тәшкил итте (Биш Бармаҡ, башҡорттарҙың иң яҡшы ризығы, биш - пять һәм бармаҡ - палец һүҙҙәренән бар булып, ваҡ итеп туралған йылҡы, һыйыр йәиһә ҡуй итенән һәм һалманан тора). Ҡунаҡтарҙың һәр береһе ҡорһағын ҡомһоҙланып тултырҙы. Бында күп итеп һауыт-һаба әҙерләү кәрәк булманы. Барса ҡунаҡтар дүрт икмәк туҫтағы менән ҡәнәғәт булды, уларға ит турап һалып, бармаҡтары менән семтемләп алып ашаныслар. Старшина һәм уға яҡын булғандар айырыуса хөрмәт ителде. Әңгәмәләшеүселәрҙең һәр ҡайһыһы, үҙ старшинаһына ярарға тырышып, бер семтем бишбармаҡ йәки туралған ит эләктереп алып, уны старшинаға һоғондорҙо. Ул ауыҙына һалынғанын йотоп та өлгөрмәй, икенсеһе уға сираттағы өлөштө ҡаптырырға әҙер тора. Ошо ғәҙәт нисек кенә йәмһеҙ булмаһын, ул башҡорттарҙа ололау ғәмәленән һанала. Ит нурпаһы һыйҙың һуңғыһы булды, уны башҡорттар туҫтаҡтан һемерҙе; нурпа эсеп бөткәс, улар Аллаһҡа шөкөр ҡылып, һый өсөн хужаға ла рәхмәт белдерҙе.

Өҫтәлдән тороусы ҡунаҡтар хужаға шул тиклем илтифатһыҙ булды, уға киске ашҡа ни ҙә булһа ҡалдырыу тураһында уйлап та бирмәне. Бында кем ни эләктерә ала, шуны өйөнә алып ҡайта, йәиһә алғанын шунда уҡ мәжлес тирәһендә туҫтаҡ тотоп сыуалып йөрөүсе бала-сағаға таратып бирә. Мәжлестәрҙең шәбе уларҙа ошо рәүешле атҡарыла, ҡунаҡтар саҡырыу буйынса түгел, ә олоҫтағы дөйөм белдереүгә ярашлы йыйыла. Уларҙың аштан туймаҫтай булыуы, бер-береһе алдынан итте бик йылдам эләктереп алыуы беҙгә бигерәк тә сәйер тойолдо. Беҙҙең ылаусыбыҙ, йәш кенә егет, үҙенең ашҡаҙанын шундай тыңҡыслап тултырҙы ки, хатта атҡа ла көсхәл менән менә алды; беҙ, көлә-көлә, ҡомһоҙлоҡ арҡаһында уның үҙ һаулығына зыян килтереүе хаҡында әйттек, ә ул былай тип яуап ҡайтарҙы: бындай байрамдар уларҙа һирәк була, һәм ҡорһағыңды артығы менән тултырыу фарыз: кем мәжлестә аҙ ашай, шул кешене ҡунаҡ тип тә күрмәйҙәр.

(Дауамы бар).

✓ *Бесәнгә йыйынып, атын егә башлаһа, мин ҡыуанам, сөнки Шүлкә урманына тиклем 15 саҡрым, атай барып еткәнсе, ҡайтҡансы йырлай. Беҙҙе йыр арбаһында ғына йөрөттө ул шулай.*

Һүҙ - көмөш, йыр - алтын, тип, халҡыбыҙ был сәнғәт төрөн ифрат юғары баһалаған, көйһөҙ менән моңдаш булыуҙан хәүефләнгән. Милләттәштәребеҙ араһында хатта ғаиләләре менән йырлағандар бар, башҡорт эстрадаһында ла ундайҙар байтаҡ. Ағалы-ҡустылы Туйсиндарҙың бер туған апайҙары Флүрә Туйсинаның моңон ишетеп, үҙен күреп белһәк тә, яҡындан аралашырға мөмкинселек сыҡҡаны юҡ ине әлегә. Затлы нәҫелдең затлы ҡыҙы ниндәй уйҙар менән йәшәй? Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Флүрә ТУЙСИНА һәм уның ҡыҙы, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актрисаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фирүзә ПАРИЖ менән ошолар һәм матурлыҡ, ҡатын-ҡыҙ асылы, уның был тормоштағы урыны кеүек фәлсәфәүи төшөнсәләр хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.

▸ "Нәҫел дәрәжәһе үҙе бер бәрәкәт: тамыры баҡыр ағастың сатыры алтын булмаҫ", - тигән һүҙҙәре бар Мостай Кәримдең. Йырсы Париж Туйсиндың уллары ла, ҡыҙҙары ла йырсы икәнен барыһы ла белә, атайығыҙ, ҡартатайығыҙ һеҙҙең хәтерегеҙҙә ниндәй булып һаҡланған?

Ф. ТУЙСИНА: Нәҫелебеҙҙә, ысынлап та, затлы-затлы ҡартатайҙарыбыҙ, инәйҙәребеҙ, апайҙарыбыҙ бар. Рәшиҙә апай Туйсина үҙе бер маяҡ булып торҙо беҙҙең өсөн. Ниндәй илдәрҙә сығыш яһай - был хаҡта атайым белеп торҙо. Уның ауылыбыҙға ҡайтыуы ҙур байрамға әйләнер ине. Башҡорт юҡҡа ғына шәжәрәһен белеүгә иғтибарлы булмаған, нәҫелең тирәләй тупланған ыңғай энергетика һиңә лә ярҙам итә. Республика белмәһә лә, атайымдың атаһы Хәлфетдин Туйсинды район белә, һуғыш ветераны, етәксе урындарҙа эшләгән ул. Мин атайым Париждың баш балаһы, беҙ ғаиләлә 11 бала йырға-моңға сорналып үҫтек.

Башта бер-бер артлы 5 ҡыҙ тыуған - Флүрә, Мөнирә, Зөһрә, Зәкирә, Зәкиә. Колхоздың гөрләп торған мәле, йәйгеһен бесәнгә, миндек, селек бәйләргә шул эреле-ваҡлы биш ҡыҙын да йөрөтә ине атай. "Минең доярҡаларым", - тигән яратҡан һүҙе лә булды. Үҙ иленең тоғро улы булараҡ, ҡыҙҙарын колхозға кәрәкле кешеләр итеп үҫтергеһе килгәндер инде. Бесәнгә йыйынып, атын егә башлаһа, мин ҡыуанам, сөнки Шүлкә урманына тиклем 15 саҡрым, атай барып еткәнсе, ҡайтҡансы йырлай. Беҙҙе йыр арбаһында ғына йөрөттө ул шулай. Бөгөн репертуарыбыҙҙағы "Рамай", "Ағын һыу", "Бөйрәкәй", "Вәғәҙә" тигән йырҙарыбыҙҙы унан өйрәнгәнсә башҡарабыҙ. Шул арбалағы ҡыҙҙарҙың минән башҡа береһе лә йырламай. Һәм береһе лә һауынсы булманы, араларында әҙәбиәт уҡытыусылары ла, хатта юғары белемле мал табибы ла бар. Беҙ урамдан арбала үтеп барғанда, төртмә телле ағай-апайҙар: "Тыр-тыр, тыр, арба, Париждың ҡыҙҙары бер арба", - тип һамаҡлап ҡалыр ине. 1969 йылда Йәмил тыуғас, бөтөн ауыл ҡыуанды. Шунан 1972 йылда Рәмил тыуҙы, атайыбыҙ кеше араһында нығлы баҫып йөрөй башлағандыр инде был ваҡиғанан һуң.

Шулай ҙа ҡыҙығы аҙаҡтан башланды. Мин 1976 йылда кейәүгә сыҡтым, әсәйемдең был мәлдә 8-се балаһы - өс айлыҡ Сөмбөлө бар. Мин 1977 йылда - Фирүзәне, әсәй 1978 йылда - Рәүиләне, мин Илүзәмде табам. Шунан тағы китә: әсәй 1980 йылда - Радмирҙы, мин Илшатты донъяға килтерәм. Туҡтамаҫ инде был, тип, эй көйгән булам, йәнәһе, ирем алдында ла уңайһыҙ. 1982 йылда әсәйем Айнурҙы табып алды әле тағы. Бөгөнгө көндә 11 балаһына изге теләктәрен теләп, улар менән йыуанып ултыра.

Балаларҙың тәүге сәхнәһе шул мәҙәниәт йорто булды, ул уларға ҡанат ҡуйҙы, фатиха бирҙе. Әле лә иҫләйем, Фирүзәне өс йәштә сығарҙым халыҡ алдына. "Ай, былбылым" тигән йырҙы эй һаҡау итеп тороп йырланы. Матур ғына ҡурсаҡ һатып алдым, уны сәхнә артында тотоп торам, шуға ҡарап дәртләнеп йырлай балам. Улым 9-сы класта уҡығанында уҡ баян менән концерттарымды биҙәй ине. Илүзәне ауылда эшләп йөрөгәнендә Учалы бейеү ансамбленә сығырҙылар. Шул баланы, ауылда баян уйнарға, бейеү һалырға кеше юҡ, тип, колхоз рәйесенең "Нива"һына тейәп алдым да ҡайттым. Үҙем менән бергә балаларым да ауылда сәнғәтте үҫтереүгә өлөш индерҙе.

▸ Шулай ҙа ғаиләнең рухи сәләмәтлеге ҡатын-ҡыҙҙан, тиҙәр. Әсәй, өләсәйҙәрегеҙҙән ниндәй тәрбиә өлгөләре, ҡатын-ҡыҙ асылына төшөнөргә кәңәштәр алып үҫтегеҙ?

Ф. ТУЙСИНА: Әсәйем - герой әсә, тыныс, сабыр, һоҡланғыс ҡатын-ҡыҙ. Атай йырсы, әсәй йырлаһа ла, табындарҙа, берәй мәжлестә, туйҙарҙа уның ауыҙ асып йырлап ултырғанын ғүмерҙә лә күрмәнек. 11 бала табырға ҡыйыулыҡ иткәс, атайыбыҙ шәп, ышаныслы ир булғандыр. Атайҙың әсәһе, шулай уҡ герой әсә Зөләйха ҡәртәсәйем Туйсина 10 бала тапҡан. Уны бик уңған, талапсан, хатта уҫал итеп иҫләйем. Аш-һыуға оҫта, класта уҡыйым. Әсәй пудраһын беҙҙән йәшереп ҡуйған. Аптырап тормайым, битемә он һылап, ҡашымды күмер менән һыҙып китәм мәктәпкә. Өйҙәгеләр күрмәй ҡалғандыр инде. "Флүрә, нишләнең ул, бар, битеңде йыуып ин", - тип сығарып ебәрә уҡытыусы. Бына шулай, матур булырға ынтылыш әсәйҙән күскәндер, күрәһең.

Ф. ПАРИЖ: Мине халыҡ йырҙарын йырларға атайымдың әсәһе Зәкирә өләсәйем өйрәтте. Етенсе класта уҡый инем, ваҡыт етте, тине. Тәүгеһе башҡорт халыҡ йыры "Сибай" булды, шунан эргәһенә ултыртып, үҙе артынан ҡабатлатып, "Сәлимәкәй"ҙе өйрәтте. Әсәйемдән мин "Ильяс"ты отоп алдым.

Ҡатын-ҡыҙҙың иңенә был донъяла күп бурыстар һалынған. Ир-егеткә үҙ исеменә тап төшөрмәү өсөн бер һүҙле булырға, һәр ваҡытта ла ир булып ҡала белергә генә кәрәк. Ә ҡатын-ҡыҙ иренә ярарға, балаһына лайыҡлы тәрбиә бирергә, ошондо лә һынатмаҫҡа, өйөн дә ҡарап өлгөрөргә бурыслы. Ошо бурыстар араһында тағы ла бер мөһиме бар - ул үҙенең милләт әсәһе икәнен онотмаҫҡа тейеш. Милләттең киләсәге - беҙҙең ҡулда. Ҡартәсәйҙәр, әсәйҙәр быуыны ошоно үҙәккә ҡуя белгән. Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙы шул тиклем әүҙем, теләһә ниндәй эште тотоп эшләй ҙә ҡуя, хатта матриархат булып ҡына ҡуймаһын, тип хәүефләнеп алам.

Ҡыҙ тәрбиәләүе еңелерәктер, ул һиңә эйәреп эшләп өйрәнә, һиңә ҡарап үҙен кеше араһында тота. Малайҙар менән ауырыраҡ. Өйҙә улыма, һин - ир-егет, һин нисек әйтәһең, шулай буласаҡ, тием. Һин киләсәктә ғаиләң өсөн яуаплы булаһың, тип өйрәтәм. Ир баланы хеҙмәт менән тәрбиәләйҙәр, әлбиттә, ләкин ҡалала эш күп түгел. Ҡайһы саҡ берәй эш ҡушһам, был ҡатын-ҡыҙҙар эше, тип бәхәсләшкән була. Атаһына ылыға күберәк, мин гастролдәр мәлендә атай менән ҡала бит. Башҡаларҙың әсәһе өйҙә ултыра, ә һин кис булһа, эшкә китәһең, тип әйтә ҡайһы берҙә. Минең һөнәремдең еңел түгеллеген аңлай балаларым, ҡыҙым туризм буйынса белем ала, улым футбол менән шөғөлләнә, сәхнә кешеһе булырға ынтылмайҙар.

▸ Бөгөнгө йәштәр үҙ-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендә күпкә аҡыллыраҡ, белемлерәк, тиҙәр, һеҙ уларға ҡолаҡ һалаһығыҙмы?

Ф. ТУЙСИНА: Өс ҡыҙым, бер киленем бар, ысынлап та, уларҙан мин күп нәмәгә өйрәнәм. Шаяртып, ҡәйнәләрем, тип әйтәм. Уларҙың белмәгән нәмәһе юҡ. Мин үҙем йомоғораҡ, ҡырыҫыраҡ әсәй булған-

ИҢЕБЕҘГӘ ҺАЛЫНҒАН

әммә милләт әсәһе

Актриса булмаһам, үҙем өсөн күп нәмәне аса алмаҫ, йомоғораҡ булыр инем. Кеше иң тәүҙә үҙен аңларға, үҙ-үҙе менән дуҫ булырға тейеш. Күпме кеше үҙен аңламағандан, нимәгә һәләтле икәнен белмәгәндән, үҙе өҫтөндә эшләмәгәндән бәхетһеҙ. Эске донъяһын аңламай икән, шул саҡта ныҡ аҙаша кеше. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында үҙҙәрен артыҡ баһалаған, хатта ҡабарта биреберәк тотҡандар бар. Әммә үҙен тулыһынса иренә, балаһына, донъяһына бағышлағандар, үҙҙәрен онотҡандар ҙа күп. Ҡатын-ҡыҙ үҙен яратырға тейеш - был ҡанун. Үҙеңде яратмайһың, баһаламайһың икән, башҡалар ҙа баһаламаясаҡ. Унан һуң, ҡатын-ҡыҙға мәҙәни булыу кәрәк, уның эске донъяһы бай, бөтөн булырға тейеш. Шул саҡта сабырлыҡ та, матурлыҡҡа, татыулыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылыш та килә.

Ф. ПАРИЖ: Нәҫел дәрәжәһе, әлбиттә, бәрәкәт. Минең ике яҡтан да ҡартатайымдар шәп йырсы булды. Ҡоҙалашып алғас, табындарҙа бер-береһе менән йыр аша һөйләшкән кешеләр әле улар. Атайымдың атаһы - Абдулла ҡартатай һуғыш ветераны, һуғыштан старшина дәрәжәһендә ҡайта, бик талапсан ине ул. Ошо моңдо күңелдәребеҙгә һеңдереп үҫтек.

1996 йылда "Дәрүиш" төркөмө менән "Урал моңо"нда ҡатнашырға булып киттем. Улар рок стилендәге йырҙар йырлай, мине лә сәхнәгә джинсы салбар лып ултырам. Гел генә 8-10 пар бейеү коллективы тоттоҡ, Хәлил Ишбирҙин, Рәис Низаметдиновтар килеп, бейеү һала инеләр. Район смотрҙарында бейеү буйынса ғына түгел, халыҡ театры, йыр буйынса ла Гран-приҙар алып йөрөнөк. Ул ваҡытта бергә эшләгән район башлығы Рөстәм Рафаил улы Сәйетов, ауыл хакимиәте башлығы Рафаил Сабир улы Сәлихов, Ришат Садик улы Ишмурзинға, "Наҙбикә" тигән фольклор ансамбленә йөрәгемдең түрендә ҙур рәхмәт йөрөтәм, халыҡ, ауыл өсөн тип, эшләнек.

Илүзә әлеге көндә Шамонино ҡасабаһында балалар баҡсаһында музыкаль етәксе булып эшләй, Илшат оҙаҡ йылдар Баймаҡ район мәҙәниәт йортонда эшләне, күп йырҙарымдың аранжировкаһы уныҡы. Илгизә Сибайҙа балалар баҡсаһында музыкаль етәксе. Шунан бер тапҡыр аталары: "Балаларҙың береһе лә эшкингән нәмәгә уҡыманы", - тине. Ул, балаларыбыҙ табиптар, уҡытыусылар булырҙар, тип өмөт иткәндер инде. Ә хәҙер ҡыуана. Киләсәктә ғаиләбеҙ менән сәхнәгә сығырға уйлайбыҙ. Мин Ҡолсора ауыл мәҙәниәте йортонда директор булып 40 йылға яҡын эшләп, әле бына хаҡлы ялға сығып, туғарыдонъялары етеш булды, мул йәшәнеләр. Тураһын ярып әйтә лә ҡуя ине ул. Аҡыллы уҫал булды.

Әсәйем заманына күрә бик модалы, зауыҡлы булды, ауыл ҡатындарынан айырылып торҙо ул. Атайға димләгәндәр ҙә, Силәбе өлкәһе Ҡыҙыл поселогынан килен булып төшкән. Уның "Снежинка" тигән кремдары, ҡара ҡәләмдәре булды. Бер ваҡыт күҙем ҡыҙып, ирен буяғысын ашаным да ҡуйҙым, уның еҫе әлеге ирен буяғыстарында юҡ. Мамығы менән борхолдатып, пудраһын биткә һөртәбеҙ рәхәтләнеп. Иҫемдә, дүртенсе

мындыр ул. Ә балалар икенсе төрлө бөгөн, аҡылдарына аптырайым, фекерләү ҙә икенсе. Ирҙәре, балалары менән мөнәсәбәт тә икенсе кеүек уларҙа, күпкә иғтибарлыраҡтар. Ҡатын-ҡыҙҙың төп сифаты - наҙлы булыу, тип иҫәпләйем. Ошо сифатты тәрбиәләй беләләр үҙҙәрендә. Бешеренергә, өҫтәл биҙәргә, башҡаһына өйрәнәм уларҙан. Ҡайтып та төшәләр, эшкә лә тотоналар.

Ф. ПАРИЖ: Әсәй беҙҙе икенсе төрлө, ти. Мин дә үҙемдең 20 йәшлек ҡыҙыма ҡарап, уларҙың быуыны бөтөнләй башҡа, тип уйлайым. Ҡыҙым Нәркәстең дә, улым Кинйәнең дә тормошҡа ҡарашы минеке кеүек түгел. Мин олоғайып китһәм, уларҙы аңламай йонсомаҫмынмы икән, тип тә хәүефләнеп ҡуям ҡайһы берҙә. Милләт бер урында торорға тейеш түгел, үҫеш булырға, балалар ата-әсәһенә ҡарағанда яҡшыраҡ булырға тейеш. Шул саҡта ғына милләт камиллаша.

Матурлыҡ серҙәре менән уртаҡлашығыҙ әле?

Ф. ТУЙСИНА: Фирүзә үҙеңде яратырға кәрәк, тип әйтте бит әле. Эйе, ҡатын-ҡыҙ үҙен ҡарап йөрөтөргә тейеш, тип уйлайым. Ҡайһы ваҡыт шул тиклем донъя эшенә сумам, хатта урамға ла сыҡмайым. Шунан ҡапыл мәшәҡәттәрҙе һыпырып ташлайым да, битлектәр эшләп алам. Үләндәр эсәм. Әле сәхнәгә йышыраҡ сыға башлағас, тән һомғоллоғон ҡайғыртырға ла тура килә, киске биштән һуң бөтөнләй ашамайым. Тауышың менән генә тамашасыны арбап булмай, уларға һинең матур булыуың да кәрәк.

Кейемгә бала саҡтан талапсан булдым. Әле лә зауыҡлы кейемгә битараф түгелмен, хәҙер инде ҡыҙҙар ҙа ҡотортоп ебәрә. Алтын-көмөш биҙәүестәр яратам, башҡорт ҡатын-ҡыҙы электән затлы биҙәүестәр ҡулланған. Минең Зөләйха ҡартәсәйемдең ҡулдарында алтын беләҙектәр, алтын балдаҡтар була торғайны. Ҡупшы ситектәр, камзулдарҙа йөрөр ине. Уның ҡаты капрон туҡыманан яулығы бар ине. Шуны ябынып, ҡартатай менән ҡушлап арбаға ултырып, ҡунаҡҡа китәләр, ҡартәсәйҙең яулығы елгә осоп, елпелдәп кенә барғаны әлегәләй күҙ алдында.

Ф. ПАРИЖ: Сәхнә көҙгө кеүек бит ул, унан бөтөн нәмә ус төбөндәге кеүек күренә. Кешенең, нимә һөйләүенә ҡарап, аң кимәлен, эске күңелен баһалап булған кеүек, йырсы өсөн сәхнә шулай. Ялтырап, тыштан матур булып тора ла алаһың һин унда, әммә һинең ниндәйҙер маҡсатың, халыҡҡа әйтер һүҙең булырға тейеш. Буш ялтыраусыҡтың ҡыҙығы юҡ, ул һабын ҡыуығы кеүек, матур, әммә тиҙ генә шартлап юҡҡа сыға.

Эштән арып ҡайтаһың, ниндәйҙер махсус битлектәр эшләп ултырырға ваҡыт та ҡалмай, һәр хәлдә, мин косметик сараларҙы бик үк самаһыҙ ҡулланмайым. Әммә беҙгә йәмһеҙ булырға ярамай. Кәүҙәне гел формала торорға кәрәклегенә инанғанмын. Ҡамыр аштарын бик яратам, әммә өлкәнәйә килә организмда матдәләр алышыуы "ялҡаулана". Бик яуаплы концерт, роль алдынан туҡланыуға ныҡ иғтибар итәм. Театрҙа актерҙар өсөн физик күнекмәләр яһау мөмкинлеге бар, беҙҙең менән хореограф Сулпан Асҡарова шөғөлләнә. Бөгөнгө заманда модаға инеп киткән фитнес клубтарына йөрөргә кәрәклек тыумай ҙа.

Ф. ТУЙСИНА: Ҡатын-ҡыҙҙың йөҙө генә түгел, йорто ла уның кемлеген күрһәтеп тора. Өйөң бысраҡ икән, ҡупшы итеп кейенеп сығып китеүеңдән ни файҙа? Аш-һыуҙы ла күңел һалып, тәмле итеп бешерергә өйрәнергә кәрәк. Минең ҡомалаҡ менән әсетеп бешергән икмәгемде бик маҡтайҙар. Йәй буйына ҡорот, ҡыҙыл эремсек ҡайнатып сығам.

Бөгөнгө башҡорт эстрадаһының кимәлен нисек баһалайһығыҙ?

Ф. ПАРИЖ: Бер нәмәгә инанғанмын - дәүләт көслө икән, уның сәнғәте лә көслө. Тағы ла спорт бының бер күрһәткесе булып тора. Сөнки сәнғәт менән спорт кешенең рухын күтәрә, эске күңелен байытып ҡына ҡалмай, иле өсөн ғорурлыҡ тойғолары кисерергә мәжбүр итә. Милләтте лә сәнғәт һаҡлай. Һуңғы мәлдәрҙә башҡорт театрҙары, бигерәк тә балалар өсөн тәғәйенләнгән тамашаларҙы русса уйнарға мәжбүр. 10-15 йылдан беҙгә өлкән тамашасы булып киләсәк быуынды беҙ шулай "тәрбиәләйбеҙ" бөгөн, уларҙы туған телдәренән мәхрүм итәбеҙ. Шуға ла дәүләт быға юл ҡуймаҫҡа тейеш. Иҡтисади сәбәптәрҙе бер ҡасан да рухи байлыҡтан өҫтөн ҡуйырға ярамай.

Эстрада ҙур бер диңгеҙ икән, бөгөн унда башҡорт йырсыларының кемелер яхтала, кемелер тапсыҡта йөҙөп йөрөй. Кәмәһе тишелһә, батып та китәләр. Хәтерегеҙҙә булһа, үткән быуаттың 90-сы йылдарында милли эстрадала барлыҡҡа килгән генә мөлдәр бер-береһенә оҡшамаған, бер-береһен ҡабатламаған төркөмдәр барлыҡҡа килде: "Дәрүиш", "Рух", "Аҡйондоҙ", "Карауанһарай", "Ант" һ.б. Уларҙың күбеһе хөкүмәт иғтибары булмауы һөҙөмтәһендә юҡҡа сыҡты, сөнки ул егеттәр ғаиләһен дә ҡарарға тейеш ине бит. Ижад һәм уның ярҙамында матди бөтөнләккә өлгәшеү беҙҙә һәр ваҡыт айырымлана. Ә ул төркөмдәр шуныһы менән көслө булды - һәр береһенең музыкаль белеме бар ине. Бөгөнгө эстраданы ҡый үләне баҫты, улар үҫеп кенә килгән сәскәләргә лә ҡамасаулай. Уҡымаған көйө сәхнәгә сығып йырлауҙы хуп күрмәйем мин. Нисек кенә талантлы булмаһын, йәш кешенең белеме, әҙерлеге юҡ икән, уның сығышы ситтән көлкө лә, ҡыҙғаныс та күренә. Тауар сифатһыҙ икән, уны һатып та булмай. Улар дөйөм күренеште лә боҙа, бөтөн эстрадаға кире ҡараш та уята. Унан һуң, заман үҙгәрә, беҙгә лә үҙгәрергә, шул уҡ йырға тауар итеп ҡарай башларға кәрәктер. Мәҫәлән, Татарстанда бер йыр ижад ителә икән, авторҙары уны һатып, күпме аҡса эшләй алыуы тураһында уйлай башлай. Беҙҙең халыҡ, уны кемгә һатам мин, тип ялҡаулана. Донъя хәҙер шуға ҡоролған, эшләгән эшеңде күрһәтә белергә кәрәк.

Флүрә апай, һеҙҙең ирегеҙ менән ғүмер итеүегеҙгә ошо көндәрҙә 40 йыл тулған. Мирхәт ағай - һеҙҙән, һеҙ - унан ундым, тип әйтә алаһығыҙҙыр бөгөн, моғайын?

Ф. ТУЙСИНА: Мин кейәүгә иртә сыҡһам да, бик аҡыллы кешегә сыҡҡанмын, тип уйлайым. Ирем тыныс холоҡло, ныҡ эшһөйәр. Балалар ҙа аталарын тик ыңғай яҡтан ғына белә. Беребеҙ ут булғанда, икенсебеҙ һыу булып, 40 йыл ғүмер иткәнбеҙ инде. Холҡо алтын булмаһа, шунсама ғүмер клубта эшләтмәҫ ине. Йә таңға ҡайтырға тура килә, йә көнө буйы өйгә ҡайтып инмәйһең. Ауыл ерендә мәҙәниәтте бер кимәлдә тотоу шул тиклем ауыр ул. Ауыл халҡы эскерһеҙ, уларҙың белгән һөнәрен кешегә күрһәткеһе, йырын ишеттергеһе килә. Тик уларҙы өйҙәренән алып сығыусы, ойоштороусы кәрәк. Мәҙәниәт булмаһа, халыҡтың дәрте ҡалмай бит инде ул.

Ф. ПАРИЖ: Әсәй Өфөгә килһә, атай уға көнөнә әллә нисә тапҡыр шылтырата, бер туҡтауһыҙ һөйләшәләр. Атайым - һинең продюсерың, тием. Өфөлә яңыраҡ үткән концерттан ҡайтып өлгөрмәнек, видеоларығыҙҙы интернетҡа һала һалығыҙ, ти. Сәхнәнән шуны әйттеңме, әсәйеңде һәйбәт итеп әйттеңме, тип һорай. Йондоҙо бит ул уның. Берәй кеше булһа, йөрөмә шунда ҡотороп, тиер ине. Ғүмере буйы ауылда йәшәгән кешенең әсәйҙә талант барлығын аңлауы үҙе бер хазина. Ана шулай ҡатындарын баһалай белгән ирҙәр бар ул. Яңы йырҙар эшләгеҙ, тип кенә тора. Атайыбыҙ әллә ҡайҙарҙа уҡыған, ҙур урындарҙа түрә булып ултырған ир-егеттәргә алыштырғыһыҙ, уның эске мәҙәнилеге бар. Китап күп уҡый, почта килһә, әсәй менән гәзиттәрҙе талашып уҡыйҙар. Ғүмерҙә лә һүгенгәнен ишеткәнем юҡ. Беҙ уны яратып, Абдулыч, тип йөрөтәбеҙ.

Ф. ТУЙСИНА: Балаларҙы үҫтерәйек, тип йәшәнек, белем бирҙек, уҡыттыҡ. Хәҙер уларҙың барыһын да башлы-күҙле итеп, туйҙар яһап, осороп бөттөк. Аталарының хәҙер яңы шөғөлө барлыҡҡа килде - балалар ҡасан ҡайта, тип, уларҙы көтөп йәшәй. Картуфты күберәк ултыртырға, һуғымды күберәк һуйырға тырышабыҙ. Балалар, үҙегеҙ өсөн йәшәгеҙ, һәр кемебеҙҙең үҙен үҙе ҡарарлыҡ хәле бар, тиһәләр ҙә, тауығын да, ҡаҙын да көткө килә. Ирең менән тигеҙ ғүмер кисереү, олоғайғас та балалар өсөн йәшәү - үҙе бер бәхет. Ейән-ейәнсәрҙәргә матур, мәғәнәле исемдәр һайлап ҡуштыҡ. Нуриман, Ғәйсәр, Кәрим, Кинйә, Бәхтийәр, Нәркәс, Заһиҙә - әйткән һайын әйтке килеп тора. Милләтте йола һаҡлай, тип, йолаларҙы тотабыҙ. Ураҙалар ҙа тотам.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Ҡасандыр кемдер бик әһәмиәтле фекер әйткәйне: "Һәр милләт ҡатын-ҡыҙы Аллаһы Тәғәләнән ҡала икенсе булып милләтте йәшәтә". Ысынлап та, милләттең әхлағы ла, тәрбиәһе лә, киләсәге лә ҡатын-ҡыҙҙан. Уның төп бурысы - милләт өсөн балалар үҫтереү, башҡорт халҡының киләсәген төҙөү, тип юҡҡа ғына әйтмәне әҙгәмәселәребеҙ ҙә. Ҙур сәхнәләрҙә йырлауға ҡарағанда, ғаиләһен, тимәк, милләттең киләсәген өҫтөн ҡуя белгәне өсөн дә бәхетлелер бөгөн Флүрә Туйсина менән уның ҡыҙы Фирүзә Париж. Шуның өсөн дә уларға сәхнә лә, тамашасыһы ла тоғро.

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

БУРЫСТАРЫБЫҘ КҮП,

булыу - иң мөһиме

Ҡатын-ҡыҙҙың ыңғай сифаттары күп, тик бер кире яғы бар, ул үҙенең ыңғай сифаттарын күрә белмәй, тиҙәр, бының менән килешәһегеҙме?

Ф. ПАРИЖ: Актер һөнәре алғаныма шул тиклем ҡыуанам. Йырсы ғына булһам, мин үҙемде әлеге кимәлемә тиклем үҫтерә алмаҫ инем. Актерҙар шуныһы менән бәхетле: роль өҫтөндә эшләгәндә шул образдың эске кисерештәрен, ни өсөн уның теге йәки был ваҡиғаға тарыуын, быға холҡоноң ниндәй яғы этәреүен аңлайһың. Психология тип аталған фән - иң төп дәрес ул актерға. Ошо белем тормошта ла ярҙам итә. Актриса булмаһам, үҙем өсөн күп нәмәне аса алмаҫ, йомоғораҡ булыр инем. Кеше иң тәүҙә үҙен аңларға, үҙ-үҙе менән дуҫ булырға тейеш. Күпме кеше үҙен аңламағандан, нимәгә һәләтле икәнен белмәгәндән, үҙе өҫтөндә эшләмәгәндән бәхетһеҙ. Эске донъяһын аңламай икән, шул саҡта ныҡ аҙаша кеше. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында үҙҙәрен артыҡ баһалаған, хатта ҡабарта биреберәк тотҡандар бар. Әммә үҙен тулыһынса иренә, балаһына, донъяһына бағышлағандар, үҙҙәрен онотҡандар ҙа күп. Ҡатын-ҡыҙ үҙен яратырға тейеш - был ҡанун. Үҙеңде яратмайһың, баһаламайһың икән, башҡалар ҙа баһаламаясаҡ. Унан һуң, ҡатын-ҡыҙға мәҙәни булыу кәрәк, уның эске донъяһы бай, бөтөн булырға тейеш. Шул саҡта сабырлыҡ та, матурлыҡҡа, татыулыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылыш та килә.

Һеҙ сибәр ҡатын-ҡыҙҙарһығыҙ, әммә тәбиғи матурлыҡ та һаҡлауға, тәрбиәгә мохтаж.

Беҙҙең 4 балабыҙ ҙа махсус музыка белемле. Илүзә әлеге көндә Шамонино ҡасабаһында балалар баҡсаһында музыкаль етәксе булып эшләй, Илшат оҙаҡ йылдар Баймаҡ район мәҙәниәт йортонда эшләне, күп йырҙарымдың аранжировкаһы уныҡы. Илгизә Сибайҙа балалар баҡсаһында музыкаль етәксе. Шунан бер тапҡыр аталары: "Балаларҙың береһе лә эшкингән нәмәгә уҡыманы", - тине. Ул, балаларыбыҙ табиптар, уҡытыусылар булырҙар, тип өмөт иткәндер инде. Ә хәҙер ҡыуана. Киләсәктә ғаиләбеҙ менән сәхнәгә сығырға уйлайбыҙ. Мин Ҡолсора ауыл мәҙәниәте йортонда директор булып 40 йылға яҡын эшләп, әле бына хаҡлы ялға сығып, туғарылып ултырам.

✓ *Бер аҙнанан ысынлап та ауылыбыҙҙың урта төшөнә ҡоҙа килеп төштө. Ҡунаҡтарҙы урамда осраттым. Ғималетдин ағайым бөхтә итеп кейенгән, үҙе айыҡтың айығы ине. Аҙаҡтан да әйткән һүҙендә ныҡ торҙо, эсеп йөрөмәне.*

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

Һеҙҙең ауылда нисектер, бына беҙҙең ауылда...

Тәүбәгә килеү

Горбачевтың эскелеккә ҡаршы яу асҡан мәле. Ә беҙ, йәмғәтселек, партия ағзалары, үҙ сиратыбыҙҙа, теләйбеҙме быны, әллә юҡмы, генераль секретарь бойорғас, һөжүмгә күтәрелмәй хәлебеҙ юҡ. Милиция начальнигы менән кабинетымда әңгәмә ҡороп ултыра инек, туҙыныуҙанмы, әллә һуғышыуҙанмы сәс-башы ялбыраған тәбәнәк буйлы Гөлбикә еңгә йомро ҡаластай тәгәрәп килеп инде лә ауыҙына медицина бирсәткәһе кейҙерелгән өс литрлыҡ банканы алдыбыҙға тыпылдатты:

- Нәһеҙе ҡоротто, сәсемде ағартты, нервыларымды ашап бөтөрҙө, сараһын күр, ҡәйнеш, ағайың нисәнсе көн бал әсетеп эсеп тик ята!

Милиция халҡына шул ғына кәрәк тә инде, начальник миңә етди итеп ҡараны:

- Хәҙер күрше ауылға барам. Был нәмәне сейфыңа бикләп ҡуй, ҡайтышлай һуғылып алырмын. Экспертиза үткәргәндән һуң барыһы ла асыҡланыр!

Бер аҙҙан ишектә Гөлбикәнең ире Ғималетдин үҙе күренде. Ысынлап та йөҙө шешмәкләнгән, күҙҙәре ҡыҙарған. Инде лә баҙнатһыҙ ҡыймылдап, ситке ултырғысҡа һаҡҡас, башын ҡушусланы:

- Нишләйбеҙ, мырҙа, башты Себергә ебәрә бит ен бисә!

- Ҡурҡма, һөргөндә һөрһөмәҫһең, иллә башҡаларға һабаҡ булһын өсөн төрмәгә ултыртып алыуҙары, йә мул ғына итеп штраф сәпәүҙәре бар.

Әйткәндәремдең аҙаҡҡылары ғына бының тарҡау зиһенен ҡымырйытты булһа кәрәк, оҙаҡ айнымай эсеүҙән таушалған йөҙҙә хафаланыу билдәләре сағылды:

- Өйҙәге аҡса ай башында уҡ тиненә саҡлы бүленгән, ыштараф тигәнең ҙурмы?

- Һинең бер айлыҡ эш хаҡың самаһында.Эскән килеш бисәңә ҡул күтәргән осраҡта тағы икене өҫтәйҙәр. Йәмғеһе өсәү була. Сараһыҙҙың көнөнән, заруратtан шул арауыҡта биленде биштән быуып ураҙа тоторһоң инде, ағай, эсеүҙе генә түгел, әҙәмсә тәғәмләнеүҙе лә онотоп торорға тура килер.

- Ыштараф тигән нимәне бер юлы таптырырҙар микән?

- Кисекмәҫтән күмәртәләп талап итерҙәр, шуға һуғымға инселәгән малыңды мөгөҙөнән етәкләп, совхозға иткә илтерһең. Контрактация осоронда малын тапшырырға теләүселәр, ғәҙәттә, байтаҡ йыйыла торған, ярҙам итермен, ни тиһәң дә сыбыҡ осо туғанһың да бит әле.

Әрәйен алдым, шаңҡыттым Ғималетдинде, былай ҙа ҡураныс, йоҡа кәүҙә ҡорҙай ғына булып бөршәйеп ҡалды. Шымтайыштыҡ. Бер аҙҙан быға йән кергәндәй итте, көрәктәй ус тубыҡҡа шапылданы:

- Һин әйткән нәмә ғаилә бөджәтөнән, беҙҙең кеҫәнән сыға түгелме? Билдәле, бер кемдә лә Әндрәй ҡазнаһы юҡ! Шул хаҡта уйланымы икән сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа бисура?

- Был миңә түгел, еңгәгә бирелә торған урынлы һорау.

- Тағы өҫтәп нимә ҡылырҙар икән?

- Гәзиткә яҙып, район шаулатырҙар. Етәксе булараҡ, миңә лә әләгер.

- Ана шуныһынан оялам, ғәрләнәм. Өйләнгән ике улым, бер ҡыҙым барлыҡты тегендә төпсөнөп төбөнә төшмәҫтәр. Институттың һуңғы курсында уҡып йөрөгән төпсөгөмдө киләһе йомала әйттерергә йыйыналар. Ҡоҙа булаһы кешеләр минең хаҡта нимә уйларҙар инде ошонан аҙаҡ? Дасадны!

- Нимә уйларҙары билдәле, тотанаҡһыҙлығыңды уҡып белһәләр ҙә күҙеңә бәреп әйтмәҫтәр, бары айырым фекер төйнәп күңелдәренә һалып ҡуйырҙар.

- Зитыма теймәй ултырма, мырҙа, йәме, һин йүргәктә һыҡраңа йөҙөп ятҡан саҡта мин дастоин ир инем.

- Бөгөн достоинһыңмы һуң?

- Бер аҙна туғарылып алдым. Уның ҡарауы, башҡа ваҡытта йүгереп йөрөлә, тракторым боҙолмай, һәр саҡ төҙәк, эшкә ҡара таңдан сығам, эңер төшкәс кенә ҡайтып йығылам. Райондан бирелгән Почет грамоталарын, рәхмәт хаттарын әпкиләм, ышанмаһаң.

- Уны милиция начальнигына, район прокурорына күрһәтерһең, бәлки, хөкөм сығарғанда ташлама яһарҙар.

- Эйе, улар һине аңланы ти аңламай ҙа. Бына һин үҙебеҙҙең кеше, атайың мәрхүмгә оҡшап, мәрхәмәтлеһең.

- Һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтыраһыңмы?

- Шыпа ла арттырмайым, ызнамы шәп егетһең!

- Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, ниндәй аныҡ йомош артынан сабыулайһың?

- Теге банка ҡайҙа икән?

- Милиция начальнигы үҙе менән алды. Ҡызлауы бөтөп, бирсәткә һулығас, бал өлгөрөп еткән, әсегән, экспертиза үткәреү ваҡытты оҙаҡ алмаҫ, тигәндәй булды. Аҙна аҙағында килеп алырҙар.

- Кемде?.. Әҙәм күҙенән ҡасып-боҫоп үҙем дә бара алам.

- Шул тиклем дә бер ҡатлы булырһың икән, ағай, замана тәртиптәрен белеп еткермәйһең. Һине алырға тулы составта милиция нарядын ултыртып, рәшәткәле машина ебәрәсәктәр, еңгәне ҡаҡҡан-һуҡҡан кеше булараҡ, ҡулыңа бығау һалыуҙары ла бик ихтимал. Совет закондарына ҡаршы сығып, эсеп кенә ятмағанһың, кеше ғүмеренә ҡурҡыныс менән янағанһың. Ә һин башта мин тумбыткан төрмә һүҙенә иғтибар ҙа итмәгән булаһың. - Алдымда ятҡан "Һайлауҙар тураһындағы закон" брошюраһының биттәрен асҡыланым. - Был енәйәт кодексының нисәнсе статьяһы әле?.. Ә бына был пункт, таптым... Әгәр тән йәрәхәттәре һалынһа, һыҙырылған ерҙәр табылһа, күгәргән таптың ҡан һауыу төҫө асыҡланһа, ҡаты режим менән 10 йыл... Еңгәнең сәләмәтлеге әлеге көндә сыҙарлыҡтыр?

- Асыуым килгәс, елтерәтеп кенә ебәргәйнем, бер ергә ҡағылманы ла, һуғылманы ла...

- Тимәк, был һинең файҙаға... Әһә, бынау ерҙә ул хаҡта былай тип яҙғандар... Күп түгел, дөйөм хеҙмәт колонияһында биш йыл ғына, ағай, ул ни күҙ асып йомған арала үтә лә китә инде.

- Нисек би... биш?..

- Бына аҡҡа ҡара менән шулай тиелгән.

- Әллә милитсиә менән ирҙәрсә, килештереп үҙең һөйләшеп ҡарайһыңмы? Баҫып ҡалдырайыҡ был эште, мырҙа, ғүмерем буйы бурыслы булырмын, тәүбәгә киләм, ант итәм. Әйтеп торам бит, ҡоҙалар көтәбеҙ, йортома туғантыумасаны йыям.

- Ни әмәл ҡылмаҡ, батаны һинһеҙ генә уҡытырҙар.

- Нисек минһеҙ? Берҙән-бер ҡыҙым, төпсөгөмә киләләр. Башҡа миңә ундай изге ғәмәл тәтемәй, аңлайһыңмы шуны?

- Аңлайым да бит.

- Аңлаһаң, ҡотҡар, эт ашамаҫ хәлдә түгелмен. Минең дә ярҙамым тейер, бер һуҡмаҡтан йөрөйбөҙ, бер инештең һыуын һыулайбыҙ.

- Бөгөндән бал әсетмәҫкә, тәмләп ҡарамаҫҡа булып киттең инде? Бүктеңме, әллә бүктерҙеләрме?

- Икмәк өҫтө, инде ауыҙыма ла алмайым!

- Шул һүҙҙәреңде ошо ҡағыҙға теркәп ҡуй әле.

Ҡатҡан бармаҡтары араһына авторучканы ипһеҙ ҡыҫтырып, маңлайын сырылдырып оҙаҡ мөштөрҙәне Ғималетдин. Мәшәкәтен ослағас, шырт баҫҡан сикәләрен ҡул һырты менән ыуҙы. - Был ижад тигән нимә менән булашҡансы, трактор баранкаһын борғослауың мең артыҡ.

- Нимә тип яҙҙың инде?

- Бынан бүтән эсмәҫкә тырышырмын, тинем.

- Тырышып та килеп сыҡмаһа?

- Сыҙармын.

- Балды ҡайһылайыраҡ итеп әсетеүеңде лә теркәнеңме? Тәжрибә менән уртаҡлашыу ҙа кәрәк бит.

- Шәкәр ҡомона ҡытлыҡ бит бөгөн, шуға сөгөлдөргә ҡалды көн. Ул хаҡта сурытыу килешмәҫ.

- Хәҙер ошо ҡултамғалы тәүбә-хатыңды мөһим ҡағыҙҙар араһына һалып ҡуям. Әгәр бынан бүтән еңгәнең сәсен ялбыратып, ауыл Советы һуҡмағын тапатһаң, урынлы-урынһыҙға кәмһетһәң, йәберләһәң, минән яҡшылыҡ һәм аяу көтмә!

- Уға бығаса бармаҡ менән дә ҡағылманым, үҙе сыпраңлаҡ фиғелле бит. Бөгөн иртән малды көтөүгә ҡыуғас, әпәт осоп-ҡунып ҡултыҡ аҫтына килде лә инде, аптыраған көндән бөгөләкләгән алаша ише тыбызыҡлағайным, өлгөргән генә балымды ҡосаҡлап, һинең яҡҡа сыҡты ла йүгерҙе, итәгенән эләктереп өлгөрә алмай, өйөҙәп ятып ҡалдым.

Сейфтан теге банканы сығарҙым:

- Ағай, ҡайт та әсегән бал урынына кеүәҫ тултырып килтер. Ошоноң һымаҡ итеп икмәк һыныҡтарын да төшөрөргә онотма!

- Ә балды... ништәтергә?

- Түгергә!

- Түгергә? Тотошлайы менәнме?

- Түңкәргәнсе!

- Һе... - Ғималетдин икеләнгәндәй итеп һалпыш мыйыҡ остарына ҡағылды. - Хәләл ризыҡты улайтып исрафлау килешмәҫ, гөнаһ был, ҡул бармай.

- Хәләл, тинеңме?

- Барыбер хеҙмәт һалдым, тамшанып көтөп йөрөнөм. Аппарат аша ҡыуылған көмөшкә түгел бит, әсеткенән әтмәләнгән зыянһыҙ бал!

- Улайһа, зыянһыҙ эсемлегеңде районға алып китерҙәр, шунан күрерһең был шөғөлөңдөң нимә менән барып бөткәнен.

- Юҡ, бир, лутсы үҙем... - Ағайым банкаһын пинжәгенең сабыуы менән боҫормалап ишек яғына ыңғайланы.

Бер аҙнанан ысынлап та ауылыбыҙҙың урта төшөнә ҡоҙа килеп төштө. Ҡунаҡтарҙы урамда осраттым. Ғималетдин ағайым бөхтә итеп кейенгән, үҙе айыҡтың айығы ине. Аҙаҡтан да әйткән һүҙендә ныҡ торҙо, күҙгә салынып эсеп йөрөмәне.

Һиңә мин атманым!

Был лаҡапты һунарсы дуҫым һөйләне, әллә ысын, әллә буш.

Иртә таң менән Ураҙғол буйына ҡор ауларға киттек тә кистән үк барып хәстәрләп ҡуйған ҡыуышҡа инеп боҫтоҡ. Мин баҫыуҙың был башында, Рәшит ҡаршы яҡта. Игене һуғылһа ла, ҡамылды әлегә һөрмәгәндәр, шуға ҡояш сығыр-сыҡмаҫтан бында ҡорҙар ем сүпләргә йыйыласаҡ. Ята торғас, абайлап ҡалдым - Рәшиткә арт яҡтан айыу яҡынлап килә. " Ә юлдашым бер ни һиҙмәй. Ни эшләргә, бәлә яҡынлауын ҡайһылайтып иҫкәртергә? Ни булһа ла булыр тип, ҡорға тип яһаған яһауымды айыуға тоҫкап атып ебәрҙем. Ҡото алынған януар ҡыуышты емереп барып ауҙы. Үлемесле фажиғә янағанын һиҙеп өлгөргән Рәшит тә тороп йүгерә башланы, ә айыу бының артынан саба. Шартлауҙы ишеткән айыу һыпыртып ҡаса бит инде, ә Рәшит мине баҫтырып килә тип уйлай шикелле. Әҙерәктән хәле бөткән ҡотһоҙ һунарсы, ҡайырылып, инәлеүле ҡысҡырып ебәрҙе:

- Нишләп баҫтыраһың, һиңә мин атманым да инде!..

Хәйҙәр ТАПАҠОВ.

(Аҙағы. Башы 13-сө һанда).

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

КЕШЕЛӘР ОҘАҠ ЙӘШӘҺЕН, ТИП...

үҙем дә оҙаҡ йәшәй башланым

1 апрель - Көлкө көнөндә тапҡыр телле, күңелсәк аҡһаҡалыбыҙ, Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Нәби улы Кәримовҡа үҙебеҙҙең һорауҙарыбыҙ менән мөрәжәғәт иттек.

➔ Шиғриәт - әҙәбиәттең бик еңел булмаған жанры һанала. Ә шиғриәт формаһына төрөлгән сатира - бөтөнләй һирәктәрҙең генә теше үтә торған жанр. Сатира, юмор һеҙҙең ижадҡа ҡасан, нисек килеп инде?

- Был темаға тотош трактат яҙырға мөмкин булыр ине. Бер-ике һүҙ менән генә әйтеп биреп булырмы икән... Сатираға, юморға аҙыҡты тормош үҙе биреп тора. Тормошта ҡәләм осона эләгерлек ваҡиғалар һәр ваҡыт булды, бар, буласаҡ. Ә уларҙы сатира аша нисек яҡтыртыу тураһында һүҙ алып барғанда... Әгәр ҙә һин тормоштағы ул көлкөлө күренештәрҙе нисек бар, шулай итеп кенә һүрәтләһәң, сатира ла, юмор ҙа килеп сыҡмай. Шуға ла уларҙы ҡабартып та ебәрәһең, шаштырып та. Кире күренештәрҙе бына шулай кешеләрҙең күҙенә эленерлек итеп төртөп күрһәтеү - ул сатириктың мөҡәддәс бурысы. Был үҙе бер оҫталыҡ талап итә.

Кешеләрҙең бөтәһе үк булмаһа ла, күптәре күңеле менән юморист ул. Шуға күрә улар юмор ярата ла инде. Кеше бит, ғәҙәттә, иң тәүҙә гәзит-журналдың юмор һүрәтләнгән битен уҡып ала.

Ижадыма сатираның, юморҙың нисек килеп инеүенә килгәндә, мин бәләкәйҙән көлкөлө шиғырҙар яҙа инем. Тормоштоң кире яҡтарын күҙәтә йөрөү сатираға алып килде. Тормошто яратып ҡына, көлөп кенә сағылдырыу - ул юмор. Ә сарказм, башҡа ысулдар - сатираға тартым. Сатира тормоштағы насар яҡтарҙы дауалай, ә юмор еңелерәк - кешенең күңелен күтәрә, йәшәүгә ынтылыш тыуҙыра торған "ҡорал". Юмор, нисектер, кешенең үҙүҙенә ышанысын да арттыра, кәйефен дә күтәрә. Кәйефе күтәренке кеше йәшәргә, яҡшылыҡ эшләргә ынтылып тора. Сатира менән юморҙың бына шундай тәғәйенләнеше.

Сатира һәм юморҙы шиғырға ғына һыйҙырып бөтөрә алмайынса, күп кенә хикәйәләр яҙҙым. Минең һайланма әҫәрҙәремдең 1-се, 2-се томдары сатирик, юмористик шиғырҙарға, 3-сө, 4-се томдар сатирик һәм юмористик хикәйәләргә арналған. Ундай хикәйәләр үҙенән-үҙе яҙылмай, фекер киңлеге талап итә. Һәр бер шиғырҙың, һәр бер хикәйәнең фәлсәфәүи төйнәлеше булыуы мөһим. Зирәк аҡыллылыҡ, тормошҡа көлөп ҡарау, маңлай күҙе генә түгел, күңел күҙе булыуы ла кәрәк. Шуға сатираны һәр кем яҙа алмай.

➔ 1 апрель һеҙҙең өсөн ниндәй көн ул?

- 1 апрель - көлкө көнө, уны "алдау көнө" лә тип әйтәләр. Минеңсә, икеһе лә бар бында. Беҙҙең халыҡ алдауға күнегеп бөткән инде ул. Илата-илата алдаһалар ҙа көләләр. Мәҫәлән, дәүләт беҙгә нисә йыл инде матур тормош вәғәҙә итә, ләкин яҡшы, матур тормош бер ҙә күренмәй, күрсөк артынан күрсөк килә. Бына шул үҙе бер көлкө булып тойола хәҙер. Беҙ тормошто яҡшыраҡ итеп күрергә тырышабыҙ ҙа ул. Алдау килә лә сыға. Кешеләр бер-береһен алдай, дәүләт үҙе алдап тора. Шуға күрә, байрам тип, бер-беребеҙҙе алдау кәрәкмәй ҙә. Былай ҙа алданабыҙ...

➔ Һеҙҙең менән ҡыҙыҡлы, көлкөлө, фәһемле хәлдәр шул тиклем күп буламы?

- Булғылай. Үҙем менән булған бер нисә хәлде һөйләп үтәйем әле. Тимер Арыҫлан бер заман Яҙыусылар союзында йыйылышта (сатира тураһында йыйылыш ине): "Мин үҙемдең сығышымды русса яҙып килдем", - тип, русса телмәр тотто. Бында башҡорттар, татарҙар ғына ултыра, башҡа милләт кешеләре юҡ. Йыйылыш бөтөп, коридорға сыҡҡас, мин уға: "Тимер ағай, мин һине быға тиклем Арыҫлан тип йөрөй инем, һин "урыҫлан" булып сыҡтың", - тинем. Ул бик ныҡ үпкәләне. Шулай ҙа үҙемдең бер мәҡәләмдә мин уны, башҡорт сатираһының классигы булмаһа ла, "көләссигы" булды, тип яҙып сыҡтым. Ысынлап та, "көләссик" ине ул. Сөнки, уның шиғырҙарын халыҡ бик мауығып уҡый, юмористик шиғырҙарын сәхнәләрҙән һөйләйҙәр ине.

Ә икенсе бер ҡыҙыҡ хәл былай булды: бер заман, 60-сы йылдарҙа, РСФСР яҙыусылар союзында беҙҙең, минең, Рафаэль Сафиндың, Рәми Ғариповтың ижадын тикшерҙеләр. Беҙҙе ул тикшереүгә Муса Ғәли алып барҙы. Аҡ сәсле, шундай итәғәтле кеше ине бит инде ул. Тикшереү бөткәндән һуң, ниндәйҙер бер бәләкәй генә ресторанға инеп, ашап алырға булдыҡ. Беҙҙең өҫтәл эргәһендә ҙур коллектив булып, йәштәр ултыра. Уларҙың береһе беҙҙең менән танышырға булды. Муса Ғәли янына килеп: "Һеҙ кем?" - тип һораны. Ул: "Яҙыусылар", - тине. Теге кеше уның исеме менән ҡыҙыҡһынды. Ағай: "Муса Ғәли", - тип әйтте. Был мәрйә "Муса" тигәнде һәйбәт ишеткән, әммә "Ғәли" тигәнде "Йәлил" тип ишеткән. Хәҙер бөтә залға: "Иптәштәр! Беҙҙең арала беләһегеҙме кем ултыра? Күрше өҫтәлдә бөйөк шағир Муса Йәлил ултыра. Әйҙәгеҙ әле, уны сәләмләйек", - тип ҡысҡыра башланы. Бөтә зал аяғүрә баҫып, Муса "Йәлил"де ҡотлап, ҡул сапты. Муса Йәлилдең Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында әсирлектә һәләк булыуы тураһында белмәй булып сыҡты улар. Муса әйтеп ҡарай - тыңламайҙар, ҡул сабыуҙарын беләләр. Беҙ йәһәт кенә сығып китеү яғын ҡараныҡ. Донъяла бына шундай көлкөлө һәм ҡыҙғаныс хәлдәр йыш булып тора.

Шулай ҙа көлкө менән йәшәргә кәрәк, сөнки, ғалимдар әйтеүенсә, көлөп йәшәү кешенең ғүмерен оҙайта. Кешенең ғүмерен оҙайтыу юлында тырышып ятҡан көнөм. Шундай шиғырҙар яҙған өсөн дә мин оҙаҡ йәшәйемдер. Миңә хәҙер 87-се йәш китте. Кешеләр оҙаҡ йәшәһен, тип тырыша торғас, үҙем дә оҙаҡ йәшәй башланым...

Иҙел РӘХИМОВ
яҙып алды.

БУЛҒАН ХӘЛДӘР

ШАЙТАН ҺЫУЫ

-Малай тыуған! Өс ҡыҙҙан һуң, ниһайәт, малай! Әкрәмдең шатлығы эсенә һыйманы - ярты ауылға һөйөнөсөн һөйләп, колхоздың үрәпсеп торған ярһыу айғырын егеп, бала табыу йортона апарыу ҡырын тейәп сығып китте. Аушанлап һуң ғына килеп ингән ирҙе бала табыу йортонан саҡ елтерәтеп сығарманылар. Ҡатыны менән улын бирмәҫкә лә уйлағайнылар, Бибисараһы уғата ялбарып һорағас, күҙҙәреп мөлдөрәтеп көтөп торған бәләкәс кенә өс ҡыҙы хаҡында әйткәс, күнделәр. Оло ғына шәфҡәт туташы: "Ошондай көндө лә шайтан һыуы һемереп килмәһәң, өлгөрмәм тигәнһеңдер!"- тип һуҡранып оҙатып ҡалды.

Ике көн рәттән тулаған бурандан һуң, донъя тынып ҡалған. Йәш ҡар һыуығы битте семетә, сана табаны аҫтында бик үк тапалып та өлгөрмәгән ҡар, мыжыҡ ҡарт кеүек, ризаһыҙлыҡ белдереп, шығыр-шығыр мыңғырлап ҡала. Аяҙ күктән тулған ай, ирәйеп, саналағыларҙы күҙәтә.

Әкрәм улын, бисәһен күреү шатлығынан байтаҡ ара теле-телгә йоҡмай һөйләнеп килде. Ярты юлға еткәс, кәрәсине бөтөп барған һуҡыр шәмдәй, шиңә, ауырая башланы, ахырҙа, уның башы балаһын ҡосаҡлап, толопҡа уранып ултырған ҡатынының алдына һалынып төштө. Мышнап ойоп киткән ирен төртөп-төртөп, әрләп-әрләп тә уята алмағас, Бибисара дилбегәне ҡулына алды. Ауыр толопто рәтләп, әйләнеп ултырғансы, балаһын ипләп һалғансы, ҡырын ерҙә сана кәйелеп, ҡамыр һымаҡ ишелеп ятҡан ир ҡарға тәкмәсте. Йомшаҡ көрткә барып сумғас та, һис ни булмағандай, йоҡлай бирҙе ир йораты. Саҡырып-саҡырып та эш сыҡмағас, ҡатын торорға мәжбүр булды. Ауырайған уҫлаптай кәүҙәне ҡарҙан саҡ һөйрәп сығарҙы, санаға инде һалдым ғына тигәндә, тынғыһыҙ йәш мал, өркөп, урынынан ҡуҙғалды. Иҫерек ир ҡайғыһы китте - Бибисара йән-тәслимгә сана артынан уҡталды. "Трр-трр, малҡай!" тип ни ҡәҙәр генә ҡысҡырмаһын, айғыр туҡтамаҫы, туҡтаманы ғына түгел, әллә тауыштан өркөп, әллә тиҙерәк ҡайтҡыһы килеп, тиҙлеген арттыра бирҙе. Бибисара ауыр тунын йолҡоп ырғытты, бара-бара быймаларын һелкеп ташланы, күпереп торған өр-яңы мамыҡ шәле лә ялбырап ятып ҡалды. Баланан һуң йүнәлеп тә бөтмәгән әсә бирешмәҫкә тырышты - асырғанып, ҡарҙа ҡанлы эҙ ҡалдырып, алға ынтылды. Тора-бара тыны ҡурыла башланы, хәле бөттө, ике түшенән субырлап аҡҡан һөтө туңып, күлдәге боҙланып ҡатты. Йәне алҡымына килгән ҡатын, юлдағы кәҫкә абынып, һөрләгөп барып төшкәс, башта бер аҙ мүкәйләп, аҙаҡ шыуышып барҙы ла ҡатып барған ҡулдары менән ҙур кәҫте ҡармап алды. Супылдап имеп ятҡан улының нурлы йөҙө пәйҙә булды - йонсоу сырайы яҡтырҙы, ҡар кисәген нығыраҡ ҡосоп, ҡатын тынып ҡалды.

Күктә тулған ай рәхәтләнеп мышнап ятҡан ирҙе, шыҡырайып туңып барған ҡатынды, ауылға етәрәк юл ситендәге боролошта аунап ятҡан йәш баланы, ат һарайы алдында айғылдап торған айғырҙы күҙҙән кисерҙе, шайтан һыуының үткер салғы кеүек өс йәнде бер юлы ҡыйыуына әсенде.

"Күбе иҫерткәндең тамсыһынан да мин һеҙҙе тыям"- Бәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с) хәҙисен иҫкә төшөрҙө ай һәм кешеләрҙең аңһыҙлығына, нәфселәренә баш була алмауҙарына йәнә эсе бошто.

ҮКЕНЕС

Сәй әҙерләп йөрөгәндә, хат ташыусы ҡатын килеп инде. Ай-вайына ҡуймай, табынға ултырттым, алдына бик тәмле кәрәҙле йүкә балы ҡуйҙым. Ҡатын балды ҡабып та ҡараманы. Бик ҡыҫтағас, ғибрәтле бер хәлде һөйләне:

- Бәләкәй сағымда алыҫ ҡына туған тейешле ағайҙарҙан, ауырыған әсәйемә дауаланыр өсөн, бал ала торғайныҡ. Бер көн шулай ағайҙарҙан банка менән бал алып ҡайтып киләм. Эй тәмләп ҡарағы килә бит быны! Түҙмәнем, яр башына ултырҙым да, бармағымды тығып ашай башланым. Ашайым-ашайым да, йылғаға төшөп һыу эсәм. Ҡараһам, балым байтаҡ бүҫкәргән. Банкамдың ҡапҡасын ябып һелккеләгән булам - юҡ инде, кәмегәне күренеп тора. Ҡайтҡас, әсәйем дә шәйләне:

- Бәрәкәт, ошолай ғына һалып бирҙеме ни?- ти.

- Эйе, - тигән булдым.

- Аҡсаһын алдан буйтым биреп ҡуйҙым, етмәһә, сыбыҡ осо булһа ла туған тейешле кеше.

Сырхау кешегә күп кәрәкме ни: бик рәнйене әсәйем, күңеле кителде. Ә мин ошо көндән һуң бал ашамаҫ булдым - тамағымдан үтмәй. Хәҙер үҙебеҙ умарта тотабыҙ. Балдың төрлөһө тәпән-тәпән ултыра, ә мин ауыҙыма ла ала алмайым. Балға үрелергә итһәм, әсәйемдең рәнйешле, йәшле күҙҙәре пәйҙә була, - ҡатындың матур ҡара күҙҙәре дымланды, тауышы ҡалтыранды. - Бәләкәй генә алдағым арҡаһында, туғандар араһы һыуынды. Әсәйем ауыҙ асып һүҙ әйтмәне уларға, әммә аралашыуҙы өҙҙө.

- Һуңлап булһа ла, ниңә һөйләмәнең һуң, ниңә ғәфү үтенмәнең? - тим.

- Яңыраҡ һөйләнем, ғәфү үтендем. Әсәйем бот сабып, хайран ҡалып тыңланы. Бешеренеп, икенсе көнөндә үк ашҡа алдыҡ туғандарҙы. Берсә көлөп, берсә илап, барыһын да һөйләп бирҙем тегеләргә. Еңгәм менән ҡосаҡлашып илашып алдыҡ. Шулай итеп, һыуынған аралар яңынан ялғанды - ҡунаҡҡа йөрөшәбеҙ, аралашабыҙ, тик балды барыбер ашай алмайым.

Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) бер хәҙисендә әйткән: "Үкенес-гонаһтарҙың ярлыҡаныуы..." Гонаһтарыбыҙҙы үкенеп иҫкә алайыҡ һәм ысын күңелдән тәүбә итәйек. Иншалла, Аллаһ Тәғәлә гонаһтарыбыҙҙы ғәфү итер.

Әлисә НИҒМӘТУЛЛИНА.
Ишембай районы.

✓ *Ямғырға тәьҫир итә алырлыҡ көсө булған эре таштар иһә Башҡортостанда әҙ түгел. 1930 йылда, тыуған яҡты өйрәнеүсе М.Ф. Чурко Белорет районының Йөйәк ауылы эргәһендә мөғжизәле таш булыуы хаҡында яҙып ҡалдырған.*

ИНТЕРНЕТТАН

УТ ЯНДЫРЫП ЙОҠЛАМА

■ Бөйөк Британия ғалимдары билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарға ир-егеттәргә ҡарағанда оҙайлыраҡ йоҡо талап ителә. Баҡтиһәң, ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш мейеһе бер юлы төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеүгә һәләтле һәм көн дауамында көсөргәнешлерәк эшләй. Баш мейеләренең "ҡатмарлы" булыуы сәбәпле, ҡатын-ҡыҙҙарға оҙағыраҡ йоҡлау талап ителә. Йоҡлаған саҡта мейенең хәтер, уйҙар, телмәр өсөн яуап биргән өлөшө хис-тойғолар тыуҙырған көсөргәнештән арынып, ял итә икән. Быға тиклем ғалимдар артыҡ йоҡлауҙың да зыян булыуы хаҡында белдергәйне. Йоҡо туймау йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегенә, ҡан баҫымына йоғонто яһай, ә артыҡ йоҡлау йөрәк сиренә алып килә.

■ XX быуат буйына кешелек яман шешкә ҡаршы дарыу таба алмай. Америка ғалимдары яңы методика уйлап тапҡан, уның нигеҙендә ябай әрем үҫемлеге ята. Табиптар фекеренсә, әрем 16 сәғәт эсендә яман шеш күҙәнәктәренең 98 проценты юҡҡа сығарырға һәләтле. Уның составында артемизин тигән матдә бар, әгәр ҙә уны тимер менән бергә ҡулланғанда, онкологик сирҙәрҙе дауалап буласаҡ. Әлеге мәлдә тикшеренеүселәр әремдән дарыу яһауҙы өйрәнеү өҫтөндә.

■ Төнөн йоҡлаған ерҙә ут янып торһа, кешенең биологик ритмдары боҙола, сөнки йоҡо өсөн кәрәкле гормон мелатонин бүленеп сығыу кәмей. Был гормон етешмәһә, диабет, һимереү, хатта яман шеш башланыу ихтимал, ти белгестәр. Ҡыҙыл һәм әфлисун төҫөндәге стеналар стресс кимәлен күтәрә, тире ҡысыл башлай. Был турала Корнелль университеты ғалимдары иҫкәртә. Стеналар ни тиклем сағыуыраҡ, кеше шул тиклем тиҙерәк ашай икән, шуға ла аш-һыу бүлмәһе сағыу булмаһын, тиҙәр. Йоҡо бүлмәһенең стеналары зәңгәр булһа, яҡшыраҡ, шул саҡта йоҡо туясаҡ.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витаминының артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүен асыҡлаған.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

ЙӘЙ ТАШЫ МАЖАРАЛАРЫ

Шул саҡ Теләстән кешеләр килеп инә. Йорт тирәләй һаҡ ҡуйыла. Ҡайны кеше сит кешеләргә йәй ташын күрһәтә. Һыуҙан ҡырҡ көн элек алынған ташты кире урынына ҡайтарыу талабы ҡуйыла улар тарафынан. Олатайым менән өләсәйемде бер арбаға, ҡайныһы менән ҡәйнәһен икенсе арбаға ултыртып, сит кешеләр ауыл янындағы йәйләүгә алып китә уларҙы. Шул ваҡыт халыҡ араһынан кемдер йәй ташын һорап ала. Таш ҡулдан-ҡулға күсеп китә: береһе уның менән ауырыған күҙен ышҡый, икенсеһе ташты сырхау балаһының ауыҙына тыға, ә өсөнсөһө һыҙлаған беләге буйлап йөрөтөргә керешә. Йәй ташының сәләмәтләндереү көсө бар икәнен бөтә халыҡ белгән була ул заманда.

Мәхшәр оҙаҡ дауам итмәй - ҡораллы кешеләр ташты өләсәйемә кире ҡайтарып бирә. "Ташты һыуға ҡарап тороп һалма, - тип кәңәш бирә оло йәштәге ҡатындар. - Йылғаға арҡаң менән боролоп, яуырының аша ташла. Йәй ташы һыуға барып төшкән урынын кеше белеүен теләмәй". Әммә Саҡмағош буйына килгәс, өләсәйем кәңәште тота алмай. Һыуға ҡарап ултырып, ташты тәрәнерәк урынға төшөрә. Алған урынына һис кенә лә төшөргөһө килмәй, сөнки ташты тотоп алған урын һай була. Һай урынға һалһа, ташты эҙләп, шул урынға яңынан киләсәген күңеле менән һиҙә ул. Бынан тыш, өләсәйем таштың башҡа кешеләрҙең ҡулына эләгеүен дә теләмәй. Әгәр ул, өлкәндәрҙең һүҙен тыңлап, ташты яуырыны аша ташлаһа, тарих ошоноң менән тамамланыр ине.

Ысынында иһә хәл икенсе төрлөрәк йүнәлеш ала. Ташты һыуға төшөрөп, сүгәләп ултырған еренән күтәрелә башлауы була, өләсәйемдең кәүҙәһе көтмәгәндә юғары тиҙлектә өҫкә осоп китә һәм күктә юғала. Олатайым был мәлдә ҡатынының эргәһендә торған була. "Аллаһы Тәғәлә мине күккә алды ла ҡуйҙы, - тип аңлатты был мөғжизәне өләсәйем. - Үҙем менән нимә булғанын аңлап өлгөрмәнем. Күккә олғашыуым хаҡында олатайыңдың һүҙҙәренән сығып әйтәм".

...Аңына килгәндә, өләсәйем таныш булмаған урында тороуын аңлап ала. Тирә-яҡта йәшел ҡарағайҙар үҫеп ултырғанын күрә. Үҙенән һулда, Мәккә яғында, теҙелеп ултырған тирмәләрҙе ҡарап тора. Улар янында аҡ яулыҡ ябынып, ҡатын-ҡыҙҙар һыйыр һауа. Бихисап башҡа кешеләрҙе лә күрә ул. Таныш булмаған урында өләсәйемде бер кем дә алып йөрөмәй, шуға ул яңы донъяны үҙаллы өйрәнергә була. Атлай торғас, өләсәйем ҡара-көрән төҫтәге алмасыбар аттарҙан торған йылҡы өйөрөнә тап була. Малҡайҙарҙың ялдары шундай оҙон була - ергә етеп, шунда тулҡын-тулҡын булып ята. Улар араһында айғырҙар ҙа, бейәләр ҙә, ҡолондар ҙа була. Ҡатын-ҡыҙҙар бында ла эшкә бирелгәндәр - бейә һауалар икән. Тағы бер аҙ атлағас, өләсәйем бейек аҡ тауға барып сыға. Уның итәгендә дүрт мөгөҙлө аҡ тәкәләр йөрөгәнен күрә ул. Хайуандар таныш булмаған кешегә текләп-текләп ҡарайҙар (ошо урында өләсәйем малдарҙың үҙенә нисек ҡарағанын кәүҙәһенең торошо һәм күҙ ҡарашы ярҙамында һүрәтләп күрһәтте). Аҙмы-күпме ваҡыттан һуң уның ҡаршыһына өҫкө өлөшө ҡырҡып алынған ғәләмәт бейек тау килеп баҫа. "Ҡаршы-Көршө тауы тураһында һөйләй торғайнылар. Был тау, ахырыһы, шулдыр", - тип үҙ алдына һөйләнә ул (Минең был тау тураһында бер кемдән дә бер нәмә лә ишеткәнем булманы - **С.М.**).

Уңға тартып бара торғас, иге-сиге булмаған диңгеҙгә барып сыға өләсәйем. Һыу бөтә донъяны баҫып алғандай тойола. Тик Мәккә яғында ғына ҡоро ер барлығын күрә ул. Унда мискә йыуанлығындағы йыландарҙың, бер-береһенә уралышып, телдәрен сығарып, үҙенә текләп ҡарап тороуын күреп, ҡурҡып ҡала. Өләсәйем уларҙың араһынан атлап үтә, әммә йылан уға зыян килтермәй. "Ҡарайес-Көрәйес тигән йыландар ҙа була. Уларға ла доға ҡылығыҙ, тип өйрәтә торғайнылар ҡарттар. Был йыландар шуларҙыр", - тип эстән генә һөйләнеп ала ул.

Үтеп барышлай һөйрәлеүселәр араһында самауыр йыуанлығындағы кеҫәрткеләр йөрөгәнен дә абайлай. Саҡ ҡына арыраҡ, һыу эсендә, ошоғаса күрмәгән хайуандарҙы күреп, иҫе китә өләсәйемдең. Ғәләмәт оҙон муйындары менән бер-береһенә үрелешеп, үҙара низағлашып, шау-шыу тыуҙыралар улар. "Аҙағыраҡ, балаларым мәктәпкә барғас, мин ул хайуандарҙың һүрәтен китапта күрҙем. Һеҙ уларҙың исемен белә́негеҙ", - тип аңлатма биреп китеүҙе кәрәк тип тапты өләсәйем. Был хайуандар жираф булып сыҡты.

...Ошо урында өләсәйем аңын юғалта һәм кире үҙ донъяһына әйләнеп ҡайта. Олатайым уны йылға буйында түгел, ә кемдеңдер мунсаһы артында табып ала. Йәрәхәт-фәләнһеҙ, шул уҡ кейемендә, тик иҫһеҙ хәлдә була ул. Алты-ете сәғәттән һуң өләсәйем ҡәҙимге хәленә ҡайтҡандай тойола һәм көндәлек эштәрен башҡарырға тотона. Әммә ире һарайға инеп киткән арала, иҫкәртмәйсә, ҡапыл юҡ була. Ҡатынын ҡайҙа эҙләргә кәрәклеген белә олатайым - тиҙ-тиҙ атлап Саҡмағош яғына китә. Яр буйына килһә, өләсәйем, кейеме менән һыуға төшөп, йәй ташын һәрмәп табырға маташып йөрөгән була. Һыуҙан тартып сығарып, олатайым ҡатынын өйөнә алып ҡайта һәм сынйыр менән ауыр һандыҡҡа бәйләп ҡуя. Ошо ваҡиғанан һуң уға өләсәйем менән бик оҙаҡ мәшәҡәтләнергә тура килә. "Колхоз ойоштороло́ған мәлдә лә иҫем килделекиттеле ине әле", - тип иҫләй торғайны өләсәйем етмешенсе йылдарҙа. Тимәк, йәй ташы менән булған мажараның эҙемтәләре тиҫтә йылдан ашыу ваҡытҡа һуҙылған булып сыға.

Өләсәйемдең яҙмышы һыу аҫты донъяһы менән ныҡ бәйле булды. Йәй ташынан тыш, ул һыу һыйырҙары хаҡында ла һөйләргә яратты. Икенсе Эткол ауылынан кемдеңдер шундай һыйырҙың быҙауын алып ҡайтыуын телгә ала торғайны. Һөргөнгә ебәрелгән ҡустыһының төрмә начальнигына һыу һыйырының быҙауын тотоп алып килеүе, шул арҡала ваҡытынан алда иреккә сығыуы хаҡында бәйән иткәне лә иҫтә. "Һыуҙа яралған быҙауҙың алты имсәге була. Бала ғына булһа ла, имсәгенән һөт саптырып тора. Тик тиҙ күҙегеүсән булғанға, һирәк осраҡта ғына мандып китә ул хайуанҡай", - тип һөйләй торғайны ул.

Баҡмал өләсәйем һөйләгән мажараға оҡшашлы ваҡиғалар башҡа урындарҙа теркәлмәгәндер, ахырыһы. Һәр хәлдә, мин был турала ишеткәнем, дә уҡығаным да булманы. Фекеремсә, "тере таш" әлесә һаҡланып ҡалһа, шул Саҡмағошта ғына ҡалғандыр. Йылғаға ул Алтынбай күленән (икенсе исеме - Киндер күле) килеп ингәндер, тип фараз итәм мин. Бәлки, ошо күл беҙҙең донъя менән "Урал-батыр" риүәйәтендә һүрәтләп кителгән һыу аҫты иленең тоташҡан урынылыр. Артабанғы тикшеренеүҙәр был мәсьәләгә асыҡлыҡ индерергә булышлыҡ итер, тигән ниәттә ҡалам.

Ямғырға тәьҫир итә алырлыҡ көсө булған эре таштар иһә Башҡортостанда әҙ түгел. Бынан һикһән биш йыл элек, 1930 йылда, тыуған яҡты өйрәнеүсе М.Ф. Чурко Белорет районының Йөйәк ауылы эргәһендә мөғжизәле таш булыуы хаҡында яҙып ҡалдырған. Ҡаяны хәтерләтеп, өҫкә ҡалҡып сыҡҡан таш икән ул. Урындағы халыҡтың әйтеүенсә, шул ташты ҡамсы менән туҡмаһаң йәки уға ҡул менән тейһең, дауыллы ямғыр башлана икән. Быға башҡа милләт кешеләре лә ышана икән, сөнки бер урыҫ шул ташҡа ҡулы менән тейгән икән, ҡойма ямғыр башланған, ә ташҡа тейгән кеше аҙаҡ ауырып киткән.

Ошондай тәбиғәт һәйкәлдәре менән танышырға теләүселәргә Зәкирйән Әминевтың мәҡәләһен уҡып сығырға тәҡдим итәм. Мөғжизәле таштар тураһында әлеге көндә был ғалимдан да тулыраҡ яҙған кеше юҡ. Мәҡәлә бынан бер йыл элек урыҫ телендә баҫылып сыҡты (Аминев З.Г. Абдулкадир Инан о камне яда и об обрядах вызывания дождя // Ахнаф Харисов и актуальные проблемы башкирской филологии. (К 100-летию со дня рождения). Материалы Всероссийской научно-практической конференции. - Уфа, 2014).

Тыуған төйәгебеҙ шундай киң һәм тарихҡа иҫ киткес бай, шунлыҡтан халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын йыйып, туплап, китап итеп сығарырға теләүселәр артҡандан-арта бара. Кемдәрҙә йәй ташына ҡағылышлы ҡомартҡылар һаҡланып ҡалған, миңә ошо адрес менән мөрәжәғәт итеүегеҙҙе һорайым: mrabisamat@mail.ru

Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,
философия фәндәре докторы.
(Аҙағы. Башы 13-сө һанда).

✓ *Кешегә бары тик үҙебеҙҙе ғәйепле тойорға мәжбүр итергә генә кәрәк. Шундай кешеләр бар: уларҙа ни тиклем көслөрәк ғәйеп тойғоһо тыуҙырһаң, улар менән үҙең теләгәнсә идара итергә мөмкин.*

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

ОЛОЛАР ҺҮҘЕ - АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ

"Үҙеңдең ырыуыңа, нәҫел-нәсәбеңә генә инәй булдым тип ҡотолорға уйлама! Минең кеүек, тотош ауылға, илгә инәй бул!" Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрендәге Оло инәй һүҙҙәре менән башланып китте Ағинәйҙәр форумы. Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында ойоштороло ғған был мәртәбәле сараға төрлө ауылдарҙың ағинәйҙәр ойошмалары вәкилдәре килгәйне.

- Районыбыҙҙағы ағинәйҙәр иң әүҙем йәмәғәт ойошмаһы булып берләште бөгөн, - тине тантананы асып муниципаль район хакимиәте башлығы урынбаҫары Миңзәлә Баймырҙина. - Райондың йәмәғәт тормошонда башҡарған баһалап бөткөһөҙ хеҙмәтегеҙ өсөн рәхмәт. Һеҙҙең ярҙамдан тыш, беҙҙең эшебеҙ алға ла бармаҫ ине. Мәҫәлән, төп бәләбеҙ эскелеккә ҡаршы бергәләп көрәшәбеҙ. Эскән ҡатын-ҡыҙға "Эсмә!" тип кенә әйтеүе аҙ. Ағинәйҙәр, әйҙәгеҙ, уларҙы бөтөн сараларығыҙға ылыҡтырығыҙ, үҙегеҙ менән бергә мәсеткә алып йөрөгөҙ. Бер тыңламаһалар, бер тыңларҙар. Һеҙҙең нәсихәт, һеҙҙең ярҙам ҡулы һуҙыуығыҙ уларҙы, бәлки, ошо бәләнән йолоп алып ҡалыр. Ағинәйҙәр ҡорҙарына тупланыусыларҙың күбеһе - элекке уҡытыусы, мәҙәниәт хеҙмәткәре, тәрбиәсе һәм башҡалар. Шуға күрә лә, һеҙҙең эштәрегеҙ әүҙем һәм һөҙөмтәле. Ауылдарға яңы һулыш бирәйек, халыҡты дәртләндерәйек, тормошобоҙҙо йәнләндерәйек!

Ағинәйҙәр тарафынан районда ниндәй генә саралар үткәрелмәй. Ә был "Ағинәйҙең һүҙе - аҡылдың үҙе" тип исемләнгән бәйге беренсе тапҡыр үткәрелде. Район "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Миңзифа Ишемғолова бәйге дилбегәһен үҙ ҡулына алып, биш ағинәйҙе сәхнәгә һынау тоторға саҡырҙы. Тәүге конкурста улар һөйләү оҫталығын күрһәтеп, үҙҙәре менән таныштырып үтте. Бында Аҡъяр ауылынан Тәнзилә Ҡыҙрасова үҙе ижад иткән "Аллаһыға шөкөр ҡылам" тип исемләнгән шиғыры менән айырылып торҙо.

Ижади сығыш буйынса ярышта Зилә Сынбулатова зекер менән үрелгән мөнәжәтен, Ташҡуғай ауылынан Фәриға Күсәкова "Өләсәйҙәр" шиғырын һөйләп ишеттерҙе. Зилә Сынбулатова экологик проблемалар күтәреп яҙылған мөнәжәте менән сығыш яһаһа, Гөлдәр Ҡәйепова тормош иптәше уйнаған гармунға ҡушылып, "Ҡайтырһың шикелле тойола" йырын йырланы.

Артабанғы һынау - "Алтаҡталарға яҙыуҙар" конкурсы. "Башспирт" магазинына, Аҡъярға ингән урындағы алтаҡтаға һәм Мәҙәниәт йорто буҫағаһына нимә тип яҙыр инегеҙ, тигән һорауға ағинәйҙәрҙең мәғәнәле һәм урынлы яңғыраған тәҡдимдәре һөйөндөрҙө. Мәҫәлән, "Араҡыны белеп тотонһаң - дарыу, иреп эсһәң - ағыу", "Эскелек - хурлыҡ, айыҡлыҡ - ҙурлыҡ", "Туҡта, уйлан, кире борол, ҡолға әйләнмәҫ борон" һәм башҡалар. Тыуған ауыл темаһына - "Туйған ерҙән тыуған ер яҡшы", "Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ ереңдә олтан бул" һәм башҡалар.

Шулай уҡ "Сәсәнмен тип кем әйтмәҫ..." бәйгеһендә лә ағинәйҙәр һыр бирмәне. Ә "Серле һандыҡ" конкурсында улар йолаһына, мәғәнәһенә ҡарап, башҡорт халыҡ кейемен, бизәүесен тасуирлап әйтеп бирергә тейеш ине.

Баһалама ағзалары Мәрфуға Азаматова, Гөлшат Ильясова, Әлфиә Акиловалар бәйгегә йомғаҡ яһаны. Шулай итеп, 3-сө урынға Зилә Сынбулатова (Әбүбәкер) һәм Сафия Хәләфетдинова (Иҫәнгилде) бүлешһә, 2-се урынға Гөлдәр Ҡәйепова (Сәғит), 1-се урынға Фәриға Күсәкова (Ташҡуғай) сыҡты. Гран-призы хаҡлы рәүештә 78 йәшлек Тәнзилә Ҡыҙрасова (Аҡъяр) яуланы.

Шундай матур тамаша өсөн барса йыйылған халыҡ рәхмәтле булды. Сараның бағыусыһы Роза Аллаҡолова, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Хәлил Ибраһимов та ағинәйҙәргә ҡотлауҙарын һәм рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Эйе, ағинәй - ул халыҡтың бөгөнгө хәленә дөрөҫ баһа бирә белеп, уны ғәфләт, ғәмһеҙлек йоҡоһонан уятыусы ил инәһе булырға тейеш. Ошондай һығымта менән таралышты сараны бик тә оҡшатып тамаша ҡылған халыҡ.

Айгизә АСҠАРОВА.

УЙЛЫҒА - УЙ

ҒӘҺЕМЕ БАР КИТАП

Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.

ЙӨРӘК

16. Йөрәк юл күрһәтә. "Тик йөрәк кенә теләктәргә һәм нәфсегә юлды яба ала, ул һинең башлығың һәм уҡытыусың. Һине тауышың теле түгел, йөрәгең теле саҡырып торорға тейеш. Ундай саҡта кешенең теле туҡталырға, йөрәге генә телгә килергә тейеш, тик киреһенсә түгел", тигән Әбү Бәкер Үәсити.

17. Йөрәктең өгөт-нә-сихәт уҡыусыһы. "Һәр нәмәнең үҙ өгөт-нәсихәт уҡыусыһы була, йөрәктеке - оялыу", тигән Әбү Али Рудбари.

18. Йөрәктең ҡотолоу хәле. "Хеҙмәт итеү - ул йөрәктең ҡотолоу хәле", тигән Шибли.

19. Йөрәктең рухи ысынбарлығы. "Йөрәктең өс рухи ысынбарлығы бар: Аллаһы Тәғәләлә юғалыу, уның фатихаһын алыу һәм унда йәшәү", тигән Әбү Хәсән Харакани.

20. "Аллаһы Тәғәләне танығандың йөрәге яҡтырып янып тора", тигән Баязит.

21. Йөрәк туҡтауһыҙ хәрәкәттә, бер хәлдән икенсеһенә әйләнә тора. Һәр әйләнеш һайын ул яңы белемгә эйә була, белем инә яңы ысынбарлыҡ тыуҙыра, ә һәр бер ысынбарлыҡ Аллаһы Тәғәләгә юл һала.

22. Йөрәктә меҫкенлек донъяһына алып бара торған теләктәр юҡ.

23. Йөрәктең науығыуы. "Йөрәк өсөн дүрт науығыу юлы бар: Ҡорьән уҡыу һәм уның тураһында фекер йөрөтөү, ашҡаҙанды буш тотоу, яҡшы кәйефле булыу һәм таңдан намаҙ уҡыу, изге кешеләр менән аралашыу", тигән Ибраһим Һаууас.

(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН

ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Бишенсе сер: мин дә, һин дә ғәйепле түгел

Хәҙерге йәмғиәттә ғәйеп тойғоһо стрестың иң киң таралған формаһы булып тора. Донъя үҙен ғәйепле тойған кешеләр менән тулған. Әгәр һеҙ ошо емергес хис-тойғонан ҡотола алмағанһығыҙ икән, ул һеҙҙе кешелектең башҡа вәкилдәре менән оҡшаш итәсәк.

Ғаилә, дуҫтар, йәмғиәт, мәктәп, яратҡан кешеләр һәм дин аҡлы йәки аңһыҙ рәүештә беҙҙе ғәйеп тойғоһо кисереүсе "мәңгелек двигателгә" әйләндерә. Бала саҡтан уҡ насар тәртибебеҙҙе даими иҫебеҙгә төшөрөп, ҡылған ҡылыҡтарыбыҙ, әйткән һүҙҙәребеҙ өсөн үҙебеҙҙе ғәйепле тойорға мәжбүр итәләр. Күптәр тирә-яҡтағыларҙың хуплауына мохтаж булған өсөн генә тышҡы сығанаҡтарҙан көсләп тағылған ғәйеп тойғоһон еңерлек хәлдә түгел.

Ғәйеп тойғоһо - манипуляцияның мөһим ҡоралы. Кешегә бары тик үҙебеҙҙе ғәйепле тойорға мәжбүр итергә генә кәрәк, һәм беҙ бар көсөбөҙгә уның әлекке мөнәсәбәтен яуларға тырышасаҡбыҙ. Шундай кешеләр бар: уларҙа ни тиклем көслөрәк ғәйеп тойғоһо тыуҙырһаң, улар менән үҙең теләгәнсә идара итергә мөмкин.

Ни өсөн беҙ быға юл ҡуябыҙ? Сөнки ғәйеп бик йыш битарафһыҙлыҡ тип күҙаллана. Әгәр һеҙгә барыбер икән, тимәк, һеҙ насар кеше. Әммә ғәйеп тойғоһоноң хәстәрлеккә бер ниндәй ҡыҫылышы ла юҡ. Был, моғайын да, күпселек ғәҙәти тип һанаған невротик тәртиптең сағылышылыр. Икенсе төрлө әйткәндә, үҙегеҙҙең битараф булмауығыҙҙы күрһәтеү өсөн һеҙ ғәйеп тойғоһо кисереп, яфаланырға тейешһегеҙ.

Бик күп кеше шундай буталсыҡ фекер менән йәшәй. Шуныһы ҡыҙыҡ: кешегә бер ваҡытта ла ғәйеп тойғоһо кисерергә ярамай, тинһәң, кемдер булһа ла, "Мин үҙемде бер нәмә өсөн дә ғәйепле тойорға тейеш түгелменме?" тип һорай. Әлбиттә, ул шул тиклем үҙен ғәйепле тойорға өйрәнгән, хатта унда үҙен ғәйепле тоймаған өсөн ғәйеп тойғоһо йәшәй!

Әхлаҡҡа ҡараш

Ғәмәлдәрегеҙгә, ҡылыҡтарығыҙға күптәр, йәмғиәт йәки дин тарафынан тағылған "насар" йәки "яҡшы" ярлыҡтары бөгөнгө Аң кимәленә нигеҙләнгән субъектив баһалар һәм улар хаталы булыуы ла мөмкин. Бөгөн дөрөҫ һәм әхлаҡи күренгән нәмәләр иртәгә яңылыш һәм әхлаҡһыҙ булыуы мөмкин. Сөнки әхлаҡ билдәләмәһе урындан-урынға, ваҡыттан-ваҡытҡа үҙгәрә.

Әхлаҡ ҡанундары универсаль була алмай, сөнки универсаль ҡанундар үҙгәрмәй. Улар бик аҙ һәм һәр ерҙә, һәр урында айырым кеше, төркөм йәки диндең ҡыҫылыуынан йәки субъектив баһаһынан башҡа ҡулланыла. Ғәйеп тойғоһон аҡлаусы йәки хуплаусы Универсаль ҡанун юҡ.

Иҫегеҙҙән сығармағыҙ: ғәйеп тойғоһо - үҙегеҙ теләп алған хис-тойғо реакцияһы.

Роберт ЭНТОНИ.
(Дауамы бар).

4 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
